ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 май (һабанай) 2023

№17 (1059)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һыйыр менән картуф...**

асылыктан ҡотҡарҙы



2

**Атай улы ғына түгел,**

халыҡ улы булды...



6

**Һуғыш михнәттәре онотолмаһын!**



8-9

**Бүтән һуғыш булмаҫ,**

тип уйлағайным...



11

***Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 842 һум 28 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Уландар бөгөн Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан олаталары яҙмышын ҡабатлап, махсус хәрби операцияла йөрөй. Һеҙҙең ғаиләгә ҡағыламы был хәл?***

***Зилдә ХӘМИҘУЛЛИНА:*** Эйе, был хәл минең ғаиләмә туранан-тура ҡағыла.

Минең ике яҡтан да ҡартатайҙарым, атайымдың атаһы ла, әсәйемдең атаһы ла Бөйөк Ватан һуғышында илебеҙҙе, еребеҙҙе һаҡлап, батырҙарса һәләк булған. Әсәйемдең атаһы Сталинград ҡалаһы өсөн яуҙа хәбәрһеҙ юғала. Өләсәйем мәрхүмә, әсәйемдең әсәһе, 43 йыл буйы ҡартатайым ҡайтыр, тип көтә. Гүр эйәһе булғансы көтә ул ҡартатайымды. Донъя менән хушлашҡанда ҡартатайымдың, хәрефтәре юйылып бөткән һуңғы хаты менән уңып, төҫһөҙләнеп киткән фотоһын усына йомоп үлеп китә, бахырсыҡ ҡына өләсәйем.

Атайымдың атаһы батырҙарса һәләк була, ауылға ҡара ҡағыҙы ғына килә. Уларҙың булған башҡа ир туғандары, минең олатайымдар ҙа һуғышта ятып ҡала. Минең хәләлем мәрхүмдең дә ҡартатаһы ла, олатайҙары ла һуғышта батырҙарса һәләк була.



Хәҙерге көндә минең өлкән улым, махсус хәрби операция башлағандан алып илебеҙҙе, еребеҙҙе дошмандарҙан һаҡлап, ил һағына баҫҡан. Ҡаһарман батыр олаталарының яҙмышын ҡабатламаһын инде беҙҙең уландар. Имен-һау булһындар, Аллаһ бирһә, еңеү яулап әйләнеп ҡайтһындар.

***Лилиә НӘҒИМОВА, ике бала әсәһе, декрет ялында:*** Хәҙерге заманда бындай хәлдәр булыр тип уйламағайныҡ та бит хатта. Махсус хәрби операция башланғас, бик күп ир-егеттәрҙе ебәрҙеләр. Ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, беҙҙең ғаиләне лә был хәл урап үтмәне. Минең тормош иптәшемде, ике кескәй бала атаһын, мобилизация буйынса алып киттеләр. Беҙҙең өсөн ул көтөлмәгән хәл булды. Кескәй балаға 9 ай ғына ине. Бөтә донъя мәшәҡәттәре үҙемә тороп ҡалды. Әммә ирем махсус хәрби операцияла булғанда күберәк уның тураһында уйландыра, ҡайғыртыла. Өйҙәге ауырлыҡтар сүп кенә булып күренә. Ул ауырлыҡтарҙы тыныс ҡына башҡарырға тура килә. Дуҫтар, туғандар ярҙамлаша, уларға мең рәхмәт.

Әммә балалар йәл. Улар атайҙарын ныҡ һағына. "Атай ҡайҙа? Ҡасан ҡайта? Минең тыуған көнгә атайҙан башҡа бүләк кәрәкмәй", - тигәндә ауыр булып китә. Беҙ: "Атайығыҙ эштә, унан ҡайтҡас, уйынсыҡтар алабыҙ",- тип йыуатабыҙ. Тик уларға уйынсыҡ та, бүләктәр ҙә кәрәкмәй, ә атай кәрәк! Ғүмер үтә, балалар үҫә, ә атайҙар һаман сит яҡтарҙа. Өйҙәрен, балаларын, туғандарын һағынып, тормоштоң бөтә матур, сағыу мәлдәрен фронтта үткәрәләр. Хәҙерге заманда һуғыштар булыр тип уйламағайным... Тиҙ генә башҡа ла барып етмәй ул һүҙ. Бик ҡыҙғаныс хәл. Әлбиттә, һәммәбеҙгә ауыр. Әммә беҙ бирешмәйбеҙ. Беҙҙең ғаиләгә бирелгән ауырлыҡтарҙы лайыҡлы үткәрергә тырышабыҙ. Күпме йәш егеттәр, ирҙәр, атайҙар унда. Тиҙерәк был һуғыштын бөтөүен, иҫән-һау йөрөп ҡайтыуҙарын ғына теләйбеҙ.

## БАЛАЛАР ҠОРО

# ТЫУҒАН ЕРЕНӘ ХӘҮЕФ КИЛГӘНДӘ...

## ир-егет битараф ҡала алмай!



**"Арғымаҡ ат юл башлар,**
**Аҡыллы егет ил башлар,**
**Батыр егет яу башлар,**
**Сәсән егет дау башлар", - тигән әйтеме бар башҡорт халҡының. Юл башларҙай арғымаҡ аттар һирәк ҡалған заманда илде артынан эйәртерҙәй, уның мәнфәғәттәрен яҡлап яуға сығырҙай, даулашырҙай ир-егеттәребеҙ бармы икән? Был һорауҙы үҙебеҙгә һәр саҡ бирәбеҙ, йәштәр менән әңгәмәләшкәндә уға яуап табырға тырышабыҙ. Бөйөк Еңеү көнө алдынан тағы бер тапҡыр ошо турала һүҙ күтәреп, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Ирхан Хисаметдинов, Волга буйы федераль округының Рәсәй Геройы А.В. Доставалов исемендәге Башҡорт кадет корпусы уҡыусылары Булат Алсынбаев, Рамаҙан Ишемғолов һәм Арыҫлан Фәйзуллин менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).**

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЕҢЕҮ БАЙРАҒЫН КҮТӘРӘБЕҘ!




Республиканың Дәүләт Йыйылышында белдереүҙәренсә, быйылдан Еңеү көнөндә дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдары биналарында Рәсәй Федерацияһының, Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагтары һәм муниципаль берәмектең флагы менән бер рәттән Еңеү байрағының күсермәләре эленергә тейеш. Шулай уҡ тантаналы саралар үткәргәндә, Еңеү байрағын ҡулланыу тәртибе раҫланған.

Башҡортостанда Еңеү байрағы тураһында законды үтәмәгән өсөн вазифа биләгән кешеләргә - 10-15 мең, юридик ойошмаларға 20-25 мең һум административ штраф ҡаралған. Парламент спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, Еңеү байрағы күсермәләрен ҡулланыу тарихи хәтерҙе һаҡлауға һәм илһөйәрлек тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. "Еңеү байрағын күтәреү - ул тантаналы йола ғына түгел, - тине Константин Толкачев. - Был, тәү сиратта, замандаштарыбыҙҙың фашизмды еңгән быуынға рәхмәт билдәһе".

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Хәшиә Әхмәдей ҡыҙы ҒИНИӘТОВА һуғыштың бөтөн ауырлығын бала көйө генә үҙ иңдәрендә кисергән кеше. Аталары Әхмәдей Ғайсин, колхоздың беренсе тракторисы, һуғышҡа киткәндә Хәшиә апайға - 7, өлкән апайы Асияға 10 йәш була. Улардан тыш, ғаиләлә тағы ла 2 бәләкәй бала була. Тағы 2 бала һуғыштан һуң тыуа. Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылында тыуған, ошонда уҡ тормошҡа сығып, балалар үҫтергән, әле килене Таңсулпан менән улы Илшаттың ишле ғаиләһендә йәшәгән Хәшиә апайға һуғыш осоро хәтирәләре менән уртаҡлашыуын һорап мөрәжәғәт иттек.**

# ҺЫЙЫР МЕНӘН КАРТУФ...

## аслыҡтан ҡотҡарҙы




**➔ Хәшиә апай, бала саҡ һәм һуғыш - улар икеһе бер-береһенә ҡапма-ҡаршы төшөнсәләр. Һеҙҙең бала сағығыҙ тап шундай ауыр йылдарға тура килгән, һеҙ уны ниндәй итеп хәтерләйһегеҙ?**

- Тормошта, һис шикһеҙ, һәр кеше төрлө ҡаршылыҡтарға осрай, ауырлыҡтар күрә. Әммә һуғыштан ҡурҡынысыраҡ бер нәмә лә юҡ. Барыһы ла үтә, ауырлыҡтар онотола, бына бала көйө генә һуғыш ваҡытында күргәндәр хәтергә уйылып ҡалған. Бөгөн үҙем 90 йәшкә етеп барам, бала сағымды уйлаһам, гел әсәйемде йәлләп, илағым килә. Шул тиклем унған, тырыш кеше булды ул. Сафия ине исеме, береһенән-береһе бәләкәй балалар менән ҡала атайым яуға киткәндә.

Һаулыҡтары булған ирҙәр, егеттәрҙе һуғышҡа алалар, ошоға тиклем колхоз баҫыуҙарын һөргән техника, тракторҙарҙы ла алып китеп бөтәләр. Ауылда - ҡарт-ҡоро ла, ҡатындар, малайҙар, уларға игенен дә үҫтерергә, башҡа бөтә ауыр эштәрҙе елкәләренә һалырға тура килә. Әсәйем дә бесәнен дә саба, көбән дә һала, игенен дә ура. Аҙаҡтан да ҡартайғансы бесәнен дә эшләнеләр атайым менән. Салғыға шәп булды инде, ураҙа тотһалар ҙа, бесән сабырға бара торғайнылар.

Донъяға күҙ-ҡолаҡ булыу ул мәлдә яңы унын тултырған Асия апайыма төшә. Һуғыш ғазаптарын үҙ елкәләребеҙҙә татығанбыҙ инде. Шуныһы бар - әсәйем беҙҙе асыҡтырманы, һаҡлап алып ҡала алды. Ике һыйыр тота алды, быҙаулаһа, бер быҙауҙы үҫтереп хөкүмәткә тапшырған булалар. Мин быларҙы бәләкәй булыуым арҡаһында аҙаҡтан әсәйемдең һөйләүҙәре буйынса беләм.

**➔ Ул заманда һыйырҙы һаҡлап ҡалыу ҙа ҙур батырлыҡ бит...**

- Балаларҙы тере ҡалдырыуҙың берҙән-бер сараһы - һыйыр ағынан өҙмәү икәнен аңлағанға ла, һыйырын һаҡлап ҡалырға тырышҡандыр, тим. Колхозға бесән эшләп ҡайтҡандан һуң, үҙенә бесән эшләргә йөрөй. Олатайымдар әсәйемде ташламанылар, гел бергәләшеп эшләшеп йәшәнеләр. Атайымдың бер туған ҡустылары Әхмәр менән Мәғәҙ ярҙамлаша. Ул һыйырҙарҙың береһе яҙын быҙаулаға, юҡ була. Эҙләгәндәр, күрше ауылдарға ла барып ҡарағандар. Унъына-быныһына йөкләгәндәр. Быҙау баҡыра, уға ҡушылып балалар ҙа илайбыҙ икән. Шулай бер айҙай ваҡыт уҙғас, бер ят кеше килгән. Һыйырығыҙҙы Билалдан эҙләгеҙ. Шул-шул кеше кәртәһендә бикләп көтә, тигән. Шуны әйтер өсөн, йәйәү 18 саҡрымды үтеп, ошо ҡыуаныслы хәбәрҙе еткергән. Әсәйем Асия апайым менән һыйыр артынан киткән. Барып һәүкәшләгәс, һыйыр баҡырып ебәргән. Кешеләр алып килеп, һыйырҙы сығарғандар. Ул тоткан да ауыл яғына йүгергән, әсәйемдәр артынан әйәрә лә алмай, төнөн ҡайтып ингәндәр. Һыйыр ҡайтып торған, ти. Асия апайым өлкәнерәк балалар менән башаҡ сүпләргә йөрөгән. Ул бахырҙарҙы объездчик булып баҫыуҙарҙы һаҡлаусы Басир апа һыбай сыбыртҡылап йөрөп баҫтырған, ҡасып өлгөрмәгәндәрҙең токтарын тартып алып, бер ниһеҙ ҡайтарып ебәргән. Ашарға икмәк наҡыҫ, әсәйем йөшереп кесәһендә бойҙай алып ҡайтҡан була, шуны ҡыҙҙырып, ҡурмас итеп ашайбыҙ, ойотҡан әсәбеҙ. Күмәк балаларға ашау етешмәй ҙә киткәндер, шулай ҙа ҡайны бер ғаиләләрҙә аслыҡтан ҡолаған кеүеккә барып етмәнек.

Олатайым беҙгә ер соҡор өсөн мәсәү эшләп бирҙе. Иртән торабыҙ ҙа, шуны тотоп, ҡуянтубыҡ соҡорға китәбеҙ. Мәсет уратып алынған ине, шуға ла ере тапалмағас, шунда күп итеп ҡуянтубыҡ үҫә. Хоҙайҙың бер мөғжизәһе инде, ас, арыҡ балалар йыраҡҡа үләнтамыр йыйырға бара алмайҙар, бында яҡын. Соҡоп алабыҙ ҙа, йылғаға төшөрөп, тап-таҙа итеп йыуабыҙ. Әсәй эштән ҡайтыуға әҙерләп ҡуйбыҙ шулай. Улымдың малайҙары: "Өләсәй, һуғыш ваҡытында нимә ашаныгыҙ?" - тип һорай. "Һарына ҡаҙып, йыуып, бутҡа бешерәк, әттек, йыуа, ҡымыҙлыҡ йыйҙыҡ, башаҡ сүпләнек", - тиһәм: "Өләсәй, һеҙ ҡайһылай мәскәй булғанһығыҙ", - тип көләләр. Үҙем дә ҡушылып көләм, шулай булмаһаҡ, нисек йән аҫрамаҡ кәрәк. Беҙ күргәнде хәҙерге балалар күрмәһен. Хәҙер барыһы ла бар: ашайым тиһәң, ризыҡ бар, кейәм тиһәң, кейеме...

Ойотҡан ойотоп, шуны көйәнтәләп, Магнитогорскиға йәйәү алып барып һата ине әсәйем, үҙе лә тәүәккәл булған, ай-һай. Бер шулай беҙгә күлдәктәр алып ҡайтҡан, үҙе шул тиклем ҡыуанған, бахырым. Уны бер йыуғайныҡ, ап-аҡ булды ла ҡуйҙылар. Баҡтиһәң, простыняны синька менән буяп, шунан күлдәк тегеп һатҡандар икән. Алдағандар, тип, эй көйәләнгән булды әсәйем.

Бер шулай баҙарға китте лә, ҡайтмай ҙа ҡайтмай. Тауға менеп ҡарайбыҙ, көтәбеҙ. Өсөнсө тәүлегенә төнөн генә ҡайтып инә. Беҙ тышта илашып ултырабыҙ икән. "Әсәйебеҙ үлгәндер инде", - тип уйлағанбыҙ. Шунда ул ойотҡанға алыштырып картуф алып ҡайта. Теге картуфты, балаларымдың бәхетенән уңып китһен, тип теләк теләп сәсәләр.

**➔ Элек картуф сәсмәгәндәр, ти ҙә ҡуялар. Картуфты һуғышҡа тиклем дә сәсә инегеҙме? Ерҙе нисек эшкәртеп сәстегеҙ, хәтерләмәйһегеҙме?**

- Картуфты һуғышҡа тиклем дә үҫтергәндәр ул. Бынын ерҙе ҡаҙып сәскәндәр. Ул ишелеп уңа. Шул тиклем эре булды, ҡурсаҡ һымаҡ итеп алып йөрөп уйнаттыҡ. Баҙ тулды, урындыҡ аҫтына ла һалдыҡ. Бында ла әсәйемдең шәплеге инде, ҡарамаһаң, картуф унамы?

Ҡышҡыһын шул картуф арҡаһында аслыҡтың нимә икәнен әллә ни белмәнек. Сәлимә апай, мәрхүмә, "Әсәтем аслыҡтан шешенеп китте, Сафия, картуфыңдан бер нисә бөртөк бир инде", - тип инде. Әсәйем бирҙе менән картуф, ҡорот биреп сығарҙы. Шулай күршеләребеҙ менән бүлешеп, ҡышты сыҡтыҡ. Нисектер орлоҡҡа ла ҡалды, тип хәтерләйем. Мәктәптә балаларға өйрә бешереп ашата инеләр, сеүәтәбеҙҙе тотоп барған була торғайныҡ. Унан да эскә йылы төшә торғайны. Былай күп кешеләр аслыҡтан ыҙалағандар, үлеүселәр ҙә булған. Бала саҡтан картуфҡа ихтирамым ҙур. Әле үҙем бөксәнләп йөрөй алмаһам да, балаларым картуф сәсә, яҡшылап ҡарайҙар. Унан тәмле ризыҡ юҡ. Беҙҙе картуф ҡотҡарып алып ҡалды ла инде. Бәхетебеҙгә, 1946 йылда атайым иҫән ҡайтты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һуғыш тамамланыуға күпме һыуҙар аҡҡан, әммә йөрәктәрҙә ул һалған йәрәхәттәр бөгөн дә һыҡрай әле. Үҙенең һәм туғандарының ауыр, ас йылдарға тура килгән бала сағын, шул саҡта уларҙы йәшәтергә, һаҡлап алып ҡалырға бөтөн көсөн һалған әсәһен, һуғыштың аяуһыҙ ысынбарлығын күргән атаһын һөйләгәндә бөгөн үҙе лә әсәй, өләсәй булған Хәшиә апай тыныс ҡына ҡала алмай. "Йорт-илдәргә тыныслыҡ килеп, һәр бала үҙ атаһы, үҙ әсәһенең һөйөүендә бәхетле булып үҫһендәр", - тигән теләгемде намаҙ һайын ҡабатлайым", - ти ул. Сөнки бала саҡ менән һуғыштың бер уртаҡлығы ла юҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларынан килгән балаларҙың һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәрҙең ялын һәм сәләмәтләндереүен ойоштороу тураһында" указға ҡул ҡуйҙы. Республика етәксеһе указы менән ошо категорияға ҡараған балаларҙың ялын ойоштороу буйынса республика комитеты булдырылды һәм уның составы раҫланды. Уны Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов етәкләй.

✓Башҡортостанда йәш ауыл уҡытыусылары 690 мең һум күләмендә грант алырға мөмкин. 2023 йылда һәр береһе 690 мең һумлыҡ 150 грант ҡаралған. Шулай итеп, быйыл ауыл уҡытыусыларына ярҙам күрһәтеү өсөн 103,5 миллион һум йүнәлтелә.Республика Мәғариф һәм фән министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, конкурсҡа документтар 1 июндән ҡабул ителә башлай. Башҡортостанда педагогтар өсөн гранттар 2019 йылдың июнендә раҫланды. Грантҡа ауыл ерендә урынлашҡан мәктәптә ике йылдан ашыу эшләгән 35 йәшкә тиклемге уҡытыусылар дәғүә итергә мөмкин.

✓Башҡортостандың урман фондында 3-сө, 4-се, 5-се класлы янғын хәүефе фаразлана. Мәләүез һәм Стәрлетамаҡ райондарында 5-се (ғәҙәттән тыш) класлы янғын хәүефе көтөлә. Әлшәй, Архангел, Баймаҡ, Баҡалы, Бүздәк, Бөрйән, Дүртөйлө, Йылайыр, Иглин, Илеш, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Стәрлебаш, Туймазы, Федоровка, Хәйбулла, Саҡмағош, Шишмә райондарында 4-се класлы янғын хәүефе фаразлана. Республика халҡына ут менән эш итеү ҡағиҙәләрен үтәргә кәңәш ителә. Һүндерелмәгән шырпы һәм тәмәке төпсөктәрен ташлау, елле көндә усаҡ яғыу, ҡояш төшкән аҡланда шешә йәки быяла ярсыҡтарын ҡалдырыу тыйыла.

✓1 июлдән рәсейҙәр, шул иҫәптән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар поликлиникаларҙа психологтарға мөрәжәғәт итергә мөмкин. "Бының өсөн тәртип ҡабул ителгән, һынау үткәрелә. Беҙҙә яңы тәртип буйынса һәр поликлиникала медицина психологтары булдырыла. 1 июлгә тәртип үҙ көсөнә инә. Әле төбәктәр менән эшләйбеҙ", - тине илдең һаулыҡ һаҡлау министры Мурашко, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға психологик ярҙам программаһын әҙерләү тураһында һорауға яуап биреп.

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# "ИКЕ ЙӨҘЛӨ" ЯРҘАМ



**Иҫәндәрме-һауҙарғынамыһығыҙ! Сәләмәт-имен ҡаршыларға яҙһын һәр иртәбеҙҙе барсабыҙға ла. Иң ҙур байлыҡтың һаулыҡ икәнлегенә һәм уның үҙебеҙҙән, яҡындарыбыҙҙан башҡа бер кемгә лә кәрәк түгеллегенә көндән-көн нығыраҡ инанаһың.**

Әлбиттә, ҡайҙалыр юғарыла, тын һәм хәүефһеҙ кабинеттар ҡарамағында бар тиҙәр ул халыҡ һаулығын ҡайғырта торған Милли проект. Күрәһең, был документ һаман булһа ғәмәлдәге программаға әйләнмәгән, ә проект көйө ҡалған. Ни өсөн тигәндә, был хаҡта 2019 йылдан алып яҙалар ҙа яҙалар, ә уның "финиш" мөҙҙәте киләһе йылға тиклем тип билдәләнгән, имеш. ФАП-тар төҙөлөү һәйбәт, тик быны менән генә эш бөтмәй шул, иң мөһиме һаулыҡ һаҡлау хеҙмәтен ойоштороуҙы яҡшыртыу кәрәк. Ысын булһа, был проекттың төп маҡсаты йөрәк-ҡан тамырҙары сиренән үлем һанын кәметеү, ауырыуға тәүге ярҙам күрһәтеү эшен яҡшыртыу... һәм тағы ла әллә күпме файҙалы пункттар бар икән дә! Табипҡа яҙылыу тәртибен ябайлаштырыу, сиратта тороу ваҡытын кәметеү... Һуң, милли проект, тип дүрт йыл яҙыла, чиновниктар докладында йыш телгә алына, ә сирле... был донъяла юҡ инде.

Ысынында, һаулыҡ һаҡлау хеҙмәтендәге элекке проблемалар ҙа бер урында ҡала килә. Миҫалмы? Күп инде улар, әлегә йөрәкте тетрәтеп торған яңыраҡҡы ваҡиғаны алайыҡ, ҡыйын хәл булһа ла. Ошо йылдың 10 мартында Өфөнөң 18-се дауаханаһы клиникаһының коридорында бер ир кеше эскәмйәлә ятып йән бирә. Анализ тапшырырға килгән был кеше ҡапыл үҙен насар тоя башлағас, ишек төбөндә ултырыусы һаҡ хеҙмәткәре табиптар саҡырта. Ҡайһы бер сығанаҡтар яҙыуынса, сирле 15 минутлап медицина ярҙамһыҙ ята; ә Һаулыҡ һаҡлау министрлығы аңлатмаһында әйтелеүенсә, сирле 08.34 сәғәттә поликлиникаға килә, уның хәле мөшкөлләнеүен күргән һаҡ хеҙмәткәре сирлене эскәмйәгә яткырып, табип саҡыра. 08.41 сәғәттә ауырыуҙың йөрәге туҡтай, 08.52 сәғәттә тиҙ ярҙам төркөмө килә һәм ярҙам күрһәтә башлай, ләкин 30 минуттан һуң сирленең вафатын рәсми теркәргә мәжбүр була. Яуаптан күренеүенсә, әйтерһең дә, кемдер секундомер тотоп, ошо ваҡиғаны күҙәтеп торған. Дөрөҫ, видео яҙма бар, әлбиттә, ул да күп нәмәне асыҡларға ярҙам итәлер, тик эш үткәс, уның кемгә кәрәге бар? Яуаплылыҡтан ҡотолорға, эйе, кемгәлер файҙаһы тейеүе бар.

Сирлегә ваҡытында ярҙам күрһәтеү-күрһәтмәү мәсьәләһе тикшереneү органдары вәкәләтендә, әммә инфаркт кисергән хроник йөрәк сирле ауырыуҙарҙың йылдан-йыл арта барыуы һәм әлеге көнгә Рәсәйҙәге бөтөн үлем осраҡтарының 47 процентын тәшкил итеүе, шуға бәйле бындай сирлеләргә айырым иғтибар һәм ярҙам ойоштороу кимәле уйландырмай ҡалмай, әлбиттә. Йөрәк бит шундай "бәйһеҙ" ағза, юҡҡа ғына ла дарҫлай башлай. Ә инде кем бер тапҡыр булһа ла таң һарыһынан поликлиникаға анализ тапшыра килгәне бар, ул сират тулҡыны тәьҫирен татып ҡарағандыр: осо-ҡырыйһыҙ теҙелеп киткән әҙәм, ундағы шау-шыу, талаш, сират боҙоуҙар, тынсыу һауа... Әлеге бәхетһеҙ ирҙең шуларҙы уйлап та йөрәге сыҙамауы бик ихтимал. Мәҫәлән, Сипайловолағы 43-сө поликлиникала анализ тапшырыу өсөн ҡыш булһынмы, йәйме - тышта тороп сират алаһың, сөнки дауахананың "изге" ишектәре 08.30. тулмай асылмай ине, хәҙер нисектер, сөнки күптәр хәҙер шунан 500 метрҙағы "Инвитро"ға барып ҡан тапшырыуҙы һаулыҡ өсөн өҫтөнөрәк күрә. Әлбиттә, пенсияң йә эш хаҡыңдың дүрттән бер өлөшөн ҡалдырып китәһең, уның ҡарауы, бындағы медиктарҙың мөнәсәбәтенән үҙеңде кеше итеп тояһың. 43-сө поликлиникалағы кеүек, бында һиңә аҡырыусы-екереүсе юҡ.

Ошо айҡанлы яңыраҡ интернеттың "Бәйләнештә" сайтындағы бер мәҙәк пост иҫкә төштө. Аноним авторҙың поликлиникаға барып, тейешле кабинетҡа сират көтөүе, табиптың "аҡайып" ҡаршы алыуы, теләр-теләмәҫ кенә хәлен һорашыуы, компьютерҙан күҙен алмайынса ғына дарыуҙар яҙып биреүе бәйән ителә. Бындай һалҡын ҡараштан ризаһыҙ сыҡҡан автор түләүле клиникаға китә һәм бөтөнләй икенсе донъяға килеп эләгә. Әйҙүкләп ҡаршылайҙар быны, эргәһендә өлтөрәп торалар, һыҙып һалып ҡарайҙар, анализ алалар, МРТ-ға ебәрәләр, шунан һуң ғына дауалау курсы тәғәйенләйҙәр. Табип битлеген сискән арала автор уның баяғы түләүһеҙ поликлиника врачы икәнен таный. "Ике йөҙлө табип" тип исемләй автор был яҙмаһын.

Ә бит, ысынлап та, был хәл беҙҙең бөгөнгө һаулыҡ һаҡлау системаһының ысын йөҙөн фашлай. Ошоға тиклем киң ҡатлам халыҡҡа билдәле булмаған йәшертен бер "положение" буйынса, түләүле шәхси медицина учреждениелары ОМС (мотлаҡ медицина страховкаһы) системаһы буйынса ҡайһы бер хеҙмәттәрҙе бушлай күрһәтергә тейеш тә бит... "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" партияһы етәксеһе Сергей Миронов, әйткәндәй, түләүле клиникаларҙың ОМС системаһы буйынса бушлай хеҙмәт күрһәтергә тейеш булып та, ғәмәлдә был бурыстарын үтәүҙән баш тартыуҙарын, киреһенсә, түләүле хеҙмәттәрҙе арттырырға йыйыныуҙарын ҡырҡа тәнҡитләп сығыш яһаны һәм был хәлде "сирлеләрҙе яфа сиктереүсе медицина саботажы" тип атаны. Түләүле медицина бындай киң таралған күренешкә әйләнергә түгел, киреһенсә, дәүләт һаулыҡ һаҡлау системаһының өҫтәмә тармағы ғына булып хеҙмәт итергә тейеш, ти депутат. "Һаулыҡ һаҡлау министрлығы халыҡҡа медицина хеҙмәте күрһәтеүҙә дәүләт һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереүгә төп иғтибарҙы йүнәлтергә тейеш. Быны өсөн иһә һаулыҡ һаҡлауға аҡса бүлеүҙе ике тапҡырға арттырырға кәрәк", - ти Сергей Миронов. Ә инде уның, халыҡҡа бөтөн медицина ярҙамын бушлай итергә, шул саҡ шәхси медицинаның кәрәге ҡалмаясаҡ, тигән фекере бынан алыҫта, ярты быуатлап элекке тарихта тороп ҡалған социалистик ысынбарлыҡты һағыныу тип аңларғалыр, күрәһең. Түләүле коммерция медучреждениеларының ямғырҙан һуң үргегән бәшмәктәй донъяны баҫып алыуы, уларҙың эшмәкәрлеге юғарылағы чиновниктар мәнфәғәтенә бәйле булыуы, шулай ҙа, С.Мироновҡа беҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ аңлашылалыр, шәйт..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

***Уландар бөгөн Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан олаталары яҙмышын ҡабатлап, махсус хәрби операцияла йөрөй. Һеҙҙең ғаиләгә ҡағыламы был хәл?***

***Факил ДИЛМӨХӘМӘТОВ, Ауырғазы районы:*** Ил Президенты В.В.Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә хәрбиҙәргә, юлды иҫәпкә алмайынса, ярты йылға бер 14 тәүлек ял бирергә ҡушты. Ошо бойороҡҡа ярашлы, ике ауылдашыбыҙ ҡыҫҡа ваҡытлы отпускыға ҡайтты. Был бәхетле егеттәр Илшат Әсфәндийәров һәм Булат Ғәлимов. Беренсе булып Илшат Илфат улы, ә 20 апрель көндө Булат Мөнир улы тыуған йортҡа, ғаиләһен, ата-әсәһен, бар туғандарын күрергә ҡайтты.

Махсус хәрби операцияла йөрөүселәр яҙмышы һәр беребеҙгә ҡағыла, сөнки ауыл - ул бер ғаилә кеүек бит. Күптәр кеүек, мин дә егеттәр менән осраштым. Етди һынау үтеп, яу яланынан ҡайтҡан ике егеттең дә физик яҡтан ғына түгел, ә рухи яҡтан да нығыныуын самаланым. Тыуған яҡта, яҡындары янында булһалар ҙа, улар һаман үҙҙәрен тыныс тормошта кеүек хис итә алмайҙар, уйҙары, күңелдәре менән алыҫта. Һәр һүҙҙәрен уйлап, үлсәп, тыныс ҡына һөйләшәләр.

Ышанып та булмай: бынан бер йыл элек кенә үҙебеҙҙең "Урал" ауыл хужалығы етештереү кооперативында шаян, асыҡ, йыраҡтан уҡ ихлас сәләмләүсе, ваҡыты менән хеҙмәт дисциплинаһын боҙһа ла, намыҫ менән һәр эште еренә еткереп эшләгән Илшаттың олоғайып, үҙенең ҡартаталары кеүек олпатланып, ҡабаланмай ҡына атлауҙарына ҡарап, берсә һоҡландым, берсә аптырап та ҡуйҙым...

Үҙебеҙҙең урамда, күҙ алдында үҫеп, ир-егет ҡорона ингән, тыныс, тәртипле Булаттың яҙмыш һынауҙары алдында юғалып ҡалмай, бик етди, ҡыйыу, илһөйәр, "Башҡорт" позывнойлы ысын хәрби итеп күреп һоҡландым да, шатландым да... "Башҡортостандан күп беҙ, Раевканан, Октябрьский ҡалаһынан, Ғафури, Бишбүләк райондарынан, шулай уҡ - үҙебеҙҙең Талбазынан да. Беҙҙең эргәлә мобилизация менән СВО-ла ҡатнашҡан яугирҙар, райондаш егеттәр ҙә бар. Ҡулбашыбыҙҙа Башҡортостан флагы һәм гербы менән шевврондар, бер-беребеҙҙе тиҙ күреп ҡалабыҙ. БТР-ҙа тоҫҡаусым Ырымбур егете, Омскиҙан дуҫтарым бар ине. Һуғыш бит. Береһе менән мәңгегә хушлаштыҡ, икенсеһен госпиталдән һуң ҡайтарҙылар" , - тине ул.

Эйе, беҙҙең егеттәр Украинаның НАТО ғәскәрҙәре ярҙамында баштан-аяҡ ҡоралланған хәрби көстәренә ҡаршы бәрелештәрҙә һынатмай, индәренә төшкән хәрби бурысты намыҫ менән үтәйҙәр, һалдат антына тоғро ҡалалар.

Беҙ һеҙҙең менән ғорурланабыҙ. Хәйерле юлдар, имен-һау әйләнеп ҡайтығыҙ, батыр яугирҙарыбыҙ!

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Йыл һайын яҙ көнө башҡорт радиоһы дикторы Әхәт Мортазин иҫтәлегенә республиканың киң мәғлүмәт саралары араһында волейбол буйынса турнир үткәрелә. Быйыл турнир кесе йома, 27 апрелдә, Өфө сәнғәт училищеһының спорт залында ойошторолдо. Ярышта биш команда ҡатнашты: "Юлдаш" радиоһы, Башҡортостан юлдаш телеканалы, "Башҡортостан" ДТРК-һы, "Башҡортостан" нәшриәт йорто" предприятиеһы, "Башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары".

✓Ике яҡташыбыҙ Рәсәйҙең юғары дәүләт наградалары менән бүләкләнде. Ғафури районының ветстанция етәксеһе Фаил Зәйнетдинов ветеринария өлкәһендәге ҡаҙаныштары һәм күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн "Рәсәйҙең атҡаҙанған ветеринар табибы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. "Борай урманы" автономлы учреждениеһы директоры Илдар Хәсәнов урман хужалығы өлкәһендәге ҡаҙаныштары һәм күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн "Рәсәйҙең атҡаҙанған урмансыһы" тигән маҡтаулы исем менән бүләкләнде.

✓Өфө боксёры Азалия Әминева Каракаста уҙған халыҡ-ара уйындарҙа еңеүсе булды. Финал алышында яҡташыбыҙ Венесуэла спортсыһы Юлианна Альваресты еңде. Был турала республиканың спорт министры Руслан Хәбибовтың социаль селтәрҙәренән билдәле булды.

✓Башҡортостан юлдарында соҡор ямау эше тәүлек әйләнәһенә дауам итә. Йыл башынан төбәк һәм муниципаль-ара юлдарҙа юл инфраструктураһы өлкәһендә эштәрҙе контролдә тотоу һәм планлаштырыу системаһына (СКПДИ) яҡынса 34,5 мең соҡор индерелгән. Шуларҙың 27,9 меңдән ашыуы ремонтланған, тип хәбәр итталәр Башҡортостандың Транспорт министрлығынан.

✓2024 йылдың февраль-мартында Рәсәйҙә Бөтә донъя йәштәр фестивале ойошторола. Рәсәй Президенты Владимир Путин ошо туралағы указға ҡул ҡуйған. Хөкүмәткә өс ай эсендә сараға әҙерләнеү, шулай уҡ финанслау сығанаҡтарын билдәләү бурысы йөкмәтелде. Уларға киң мәғлүмәт сараларында фестивалде яҡтыртыуҙа ла ярҙам күрһәтергә кәрәк. Документта шулай уҡ сараға әҙерлек буйынса ойоштороу комитеты составы раҫланды. Уны Рәсәй Президенты Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Сергей Кириенко етәкләй.

✓ *Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры һүҙҙәренсә, махсус операцияла ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙ шифаханала яңғыҙ дауаланырға теләмәй, сөнки яҡындары менән үткәргән һәр минуттың ҡәҙерен белә.*



ҠЫҪҠАСА

# БУШЛАЙ...

**Дәүләт Думаһы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға, шулай уҡ уларҙың ғаилә ағзаларына бушлай юридик ярҙам тураһында закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте.** Документҡа ярашлы, бушлай юридик ярҙамға хоҡуҡлылар: махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан хәрбиҙәр; Рәсәй Федерацияһының сик буйындағы биләмәләрен һаҡлауҙа ҡатнашҡан хәрбиҙәр; мобилизацияланғандар; ирекмәндәр; әйтеп үтелгән категорияларҙың ғаилә ағзалары. "2022 йылдың 24 февраленән башлап барлыҡ мөрәжәғәттәр буйынса бушлай юридик ярҙам күрһәтеү мөмкинлеге асабыҙ. Атап әйткәндә, ышаныс ҡағыҙҙарын рәсмиләштереү буйынса нотариаль хеҙмәттәр күрһәткән өсөн түләүҙе, шулай уҡ ошондай ышаныс ҡағыҙҙарын рәсмиләштергән өсөн дәүләт пошлинаһын ғәмәлдән сығарған закон проектына өҫтәмә итеп, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләре бушлай юридик ярҙам күрһәтеү үҙәктәренә мөрәжәғәт иткәндә аҡса түләмәскә тейеш", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Дәүләт Думаһында.

✓ **Башҡортостанда олимпия, паралимпия һәм сурдлимпия уйындары еңеүселәре һәм призерҙары булған республика спортсыларына, шулай уҡ уларҙың тренерҙарына дәүләт спорт стипендияларын түләү тураһында положениелар раҫланды.** Документҡа ярашлы, республика олимпия, паралимпия һәм сурдлимпия уйындары чемпиондарына айына 30 000 һум стипендия түләй. Көмөш миҙал өсөн иһә ай һайын 25 мең һум. Өсөнсө урын өсөн 20 мең һум түләнергә тейеш. Еңеүселәр һәм призерҙар әҙерләгән тренерҙарға бер иң юғары һөҙөмтә өсөн халыҡ-ара ярыштарҙа ҡатнашыусының стипендияһы күләменән 50 проценты түләнә. Стипендия ғүмерлеккә тәғәйенләнә. Бынан алдараҡ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров олимпия, паралимпия һәм сурдлимпия уйындары еңеүселәре өсөн стипендиялар булдырыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.

✓ **Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында 2023 йылда "Агростартап" программаһы буйынса грантҡа дәғүәселәрҙе һайлап алыу буйынса конкурс комиссияһы эшләй башланы.** Әле комиссия ғариза биреүселәрҙең документтарын программа шарттарына тап килеү-килмәүен тикшерә. Артабанғы ултырыштарҙа дәғүәселәр проекттарын яҡлай. Билдәләнеүенсә, быйыл республикала "Агростартап" программаһын тормошҡа ашырыу өсөн аҡсаның дөйөм күләме 95 миллион һум тәшкил итә. "Агростартап" гранттары Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡушыуы буйынса әҙерләнгән бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарына ярҙам милли проекты сиктәрендәге "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарын акселерациялау" төбәк проекты буйынса бүленә.

✓ **2023 йылда Башҡортостандың балалар лагерҙары биләмәһендә коронавирусты иҫкәртеүгә бәйле сиклəүҙәрҙең бер өлөшө ғәмәлдә ҡала.** Республика буйынса Роспотребнадзор идаралығының балалар һәм үҫмерҙәр гигиенаһы буйынса күҙәтеү бүлеге начальнигы Римма Әхмәтшина әйтеүенсә, хәүефһеҙлек маҡсатында балаларҙың ата-әсәләре ҡатнашлығында күмәк саралар тыйылған. Учреждение хеҙмәткәрҙәре йәйге сменалар башланыр алдынан ковидҡа һәм башҡа йоғошло ауырыуҙарға тест тапшырырға тейеш. Лагерҙарҙа даими санитар режим, һауаны таҙартыу, аҙна һайын генераль йыйыштырыу эштәре башҡарыла. Балаларҙы ҡабул итергә 7 көн ҡалғас, белгестәр талпандарҙан, кимереүселәрҙән эшкәртә башлай. "Лагерҙарҙың эше каникулдар алдынан да, эш барышында ла даими контролдә тотола", - тип билдәләне эксперт.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТИГЕҘЛӘРГӘ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Махсус хәрби операция мәсьәләләре буйынса эшсе төркөм башлығы, "Берҙәм Рәсәй" генераль советы секретары Андрей Турчактың Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға аҡсалата түләүҙе һәм ярҙам сараларын бөтәһе өсөн дә тигеҙләргә тигән тәҡдимен хупланы.**

Эшсе төркөм етәксеһе фекеренсә, был ниндәй ғәскәр төрө булыуға ҡарамаҫтан башҡарылырға тейеш, һәм ул айырыуса аҡсалата түләүгә ҡағыла. Әле үҙе теләп мобилизацияланған яугир, тылдамы, әллә алғы һыҙыҡтамы булыуына ҡарамаҫтан, 195 мең һум ала, ә контрактсы бындай түләүҙе алғы һыҙыҡта булһа ғына ала. Владимир Путин Андрей Турчактың башланғысын хуплап, шулай тине: "Рәсәй өсөн ҡулына ҡорал тотоп көрәшеүселәрҙең бөтәһен дә, һис шикһеҙ, тигеҙ шарттар менән тәьмин итергә кәрәк. Беҙгә кешенең ниндәй категорияға ҡарауы түгел, ә Тыуған илгә мөнәсәбәте мөһим. Һәм, һис шикһеҙ, тигеҙлеккә өлгәшергә кәрәк". Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә ҡарата ла тигеҙ мөнәсәбәт күрһәтелергә тейеш, тине Андрей Турчак. "Беҙ ярҙам сараларының иң кәрәкле минималь төрҙәре индерелгән берҙәм федераль стандарт булдырырға һәм бюджет тәьминәте түбән төбәктәргә өҫтәмә ярҙам күрһәтергә тәҡдим итәбеҙ. Ниндәй төбәктә йәшәүенә ҡарамаҫтан, ғаиләләр бер тигеҙ яҡланһын",- тине ул.

Эшсе төркөмдөң тағы бер тәҡдиме балаларға түләү тәғәйенләү өсөн килем иҫәпләгәндә хәрбилек һәм награда түләүҙәрҙе ҡушмау хаҡында булды. Бөгөн ул ғаилә ағзаһының былтырғы йылға йән башына уртаса килеменә бәйле. Был осраҡта Оборона министрлығы түләүҙәре иҫәпкә алынмай. "Контрактсылар менән ирекмәндәргә ҡағылышлы был түләүҙәр иҫәпкә алына. Ғәҙел булһын өсөн килемде хисаплағанда хәрбилек һәм награда түләүҙәрен бөтәһе өсөн дә иҫәпләмәскә тәҡдим итәбеҙ",- тине А.Турчак. Һуңынан ул Владимир Путинға 1 июлдә федераль кимәлдә Хәрби хәрәкәттәр ветераны көнө тип билдәләргә тәҡдим итте.

# БАТЫРЛЫҠ БИЛДӘЛӘРЕ

**Республиканы үҫтереүгә тос өлөш индергән күренекле эшмәкәрҙәрҙең хәтерен мәңгеләштереү мәсьәләләре буйынса Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы комиссия ултырышы булып үҙҙы.**

Уны Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин үткәрҙе. Фекер алышыуҙа Дәүләт Йыйылышы депутаттары, республика министрлыҡтары һәм ведомстволары, йәмәғәт ойошмалары етәкселәре ҡатнашты. Ултырышта төп мәсьәләләрҙең береһе - махсус хәрби операция ваҡытында һәләк булған яҡташтарыбыҙҙың хәтерен мәңгеләштереү, тине Максим Забелин. Комиссияға республика муниципалитеттарындағы мәктәптәргә һәм йорттарға яугирҙар иҫтәлегенә мемориаль таҡтаташ ҡуйыуҙы һорап, 30 мөрәжәғәт килгән. Белем биреү учреждениеларының уҡытыусылар коллективы һәм халыҡ инициативалы төркөмдәрҙең ҡарарын хупланған. "Беҙ илһөйәрлек, киләсәк быуынды тәрбиәләү мәсьәләләре менән тейешенсә шөғөлләнәбеҙ. Ҡыйыулыҡ символдары күберәк булған һайын, йәш өфөләр, республикала йәшәүселәр ҡаһарманлыҡ өлгөләре хаҡында күберәк белә алыр, - тине Максим Забелин. - Йорттарға килгәндә, мемориаль таҡтаташ һәләк булған яҡташтарыбыҙҙың туғандары һәм яҡындары өсөн мөһим хәтер билдәләре булыр".

Ултырыш барышында комиссия ағзалары республиканың Ветерандар советы тәҡдимен хупланы, уға ярашлы Рәсәй Геройҙары Алмаз Сафин, Максим Серафимов, Тамерлан Илһамов һәм Игорь Насибуллиндың исемдәре Өфөнөң Еңеү паркындағы яңы гранит стелала мәңгеләштерелә. Комиссия ҡарары менән билдәле ғалим-археолог Нияз Мәжитов, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Михаил Рабинович, билдәле музыкант Роберт Заһретдинов, Башҡортостан радиоһы дикторы Әхәт Мортазин йәшәгән йорттарҙа ла иҫтәлекле таҡташтар ҡуйыла.

# ЯРҘАМ САРАЛАРЫ

**Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам сараларына 4 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленгән.**

Был хаҡта оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - финанс министры Лира Иғтисамова хәбәр итте. "Әлеге ваҡытта хәрбиҙәргә һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү буйынса бөтә саралар ҙа билдәле бер тәртиптә ғәмәлгә ашырыла. Бының өсөн бюджет аҡсаһының дөйөм күләме 4 миллиард һумдан ашып китә", - тине вице-премьер. Хәҙергә ҡатмарлы шарттарҙа махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә булышлыҡ итеү өҫтөнлөклө бурыс булып тора, тип билдәләне ул. Был эш бөтә йүнәлештәр буйынса ойошторолған, барлыҡ власть органдары һәм муниципалитет хакимиәттәре йәлеп ителгән. Лира Иғтисамова әйтеүенсә, әле махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың 3 мең балаһы балалар баҡсаһына бушлай йөрөй, 2,4 мең 5-11 класс уҡыусыһы һәм 500-ҙән ашыу колледж студенты бушлай ҡайнар аш менән тәьмин ителгән. Ике меңгә яҡын бала түңәрәктәрҙә бушлай шөғөлләнә, 300-гә яҡыны шифахана-курортта дауалана. Шулай уҡ хәрбиҙәрҙең балалары йәмәғәт транспортында бушлай йөрөй.

# БЕРГӘ ЯЛ ИТЕРГӘ

**Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ғына түгел, уларҙың ғаилә ағзаларына ла шифаханаларға бушлай юллама бүлеү ҡарала.**

Был хаҡта журналистарға республиканың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская хәбәр итте. Әлеге ваҡытта махсус хәрби операцияла ҡатнашыусының ғаилә ағзаларына, туғандарына бушлай йәки льготалы шарттарҙа шифахана-курорт хеҙмәттәрен күрһәтеү ҡаралмаған.

Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры һүҙҙәренсә, махсус операцияла ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙ шифаханала яңғыҙ дауаланырға теләмәй, сөнки яҡындары менән үткәргән һәр минуттың ҡәҙерен белә. Етмәһә, махсус хәрби операция - унда ҡатнашыусылар өсөн генә түгел, уларҙың ғаилә ағзалары өсөн дә стресс. 2023 йылда махсус хәрби операция яугирҙарын шифахана-курорттарҙа һауыҡтырыу өсөн республика бюджетында 100 миллион һум планлаштырылған. Бындай ярҙам сараһы менән бер тапҡыр ғына файҙаланырға мөмкин. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға (ҡатнашҡандарға) шифаханала дауаланыу өсөн алдан ғариза яҙырға кәрәк. Башҡа бер ниндәй ҙә документ талап ителмәй. 2022 йылдың икенсе яртыһында, республикала ошо ярҙам сараһы индерелгән ваҡытта, махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан 100-ҙән ашыу кеше шифахана-курорттарҙа бушлай дауаланған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә 9 майҙа буласаҡ байрам саралары планы раҫланды. 8 майҙа өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары Ленин майҙанында һәм Рус драма театры алдындағы парковкала ретро-автомобилдәр һәм тарихи техника күргәҙмәһе менән таныша ала.

✓9 майҙа байрам саралары иртәнге сәғәт 10-да Совет майҙанында Миңлеғәли Шаймуратов һәйкәленә, сәғәт 11-ҙә Еңеү паркындағы Мәңгелек утҡа сәскәләр һалыуҙан башлана. Сәғәт 12-лә Октябрь проспектынан хәрби парад үтәсәк. Сәғәт 1-ҙә Рус драма театры алдындағы майҙанда мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре концерты була. Сәғәт 4-тән төнгө 10-ға тиклем Совет майҙанында патриотик концерт программаһы планлаштырылған. Төнгө сәғәт 11-ҙән һуң Ленин майҙанында алты минут дауамында фейерверк күҙәтергә мөмкин.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында "Атайсал" аллеяһы барлыҡҡа килде. "Йәшел Башҡортостан" акцияһы барышында Комсомол урамында яңы йәмәғәт киңлегенә нигеҙ һалынды, тип хәбәр ителәр Октябрь районы хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән. Экоакцияла ҡатнашыусылар алты йүкә ултыртты, уларҙың һәр береһенең бейеклеге - алты метрҙан ашыуыраҡ.

✓2 майҙа Дуҫлыҡ монументында йылғала йөрөү миҙгеле асылды. Был көндө Өфөгә дүрт палубалы "йылға-диңгеҙ" класлы "Мостай Кәрим" теплоходы килде. Ул Рәсәйҙең иң уңайлы круиз лайнерҙарының береһе. Шулай уҡ дүрт палубалы "Александр Пушкин" һәм ике палубалы "Башҡортостан" теплоходының килеүе көтөлә. 14 майға тиклем Өфө тиҫтәләп лайнерҙы ҡаршы аласаҡ.

✓Быйыл йәй ваҡытынан алда килде. Һауа температураһы 27-30 градусҡаса күтәрелһә лә, ҡала властары һыу инеү миҙгелен алдан асыуҙан тыйылып торорға кәңәш итә, сөнки йылғаларҙа һәм күлдәрҙә һыу тейешле температураға тиклем йылынмаған, ташҡындан һуң яр буйы территорияларын, һыу яткылыктарын төбөн таҙартыу, территорияны талпанға һәм кимереүселәргә ҡаршы эшкәртеү талап ителә. Быйыл да баш ҡалала 10 рәсми пляж эшләйәсәк.

✓51а ҡала маршрутына яңы НефАЗ 57.40.5299 автобусы тест һынауы үтергә сыҡҡан. Ул ҙур күләмле, "Уңайлы мөхит" программаһы талаптарына яуап бирә. Үҙенсәлеге - яғыулыҡ урынына тәбиғи газ ҡуллана.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Бөгөн ҡыйһы бер йәштәр заман ауырлығына зарланырға ярата. Иҫән кешегә тегеһе лә, быныһы ла етмәй. Юҡлыҡты, мохтажлыҡты, аслыҡ-яланғаслыҡты кисергән ветерандар өсөн бөгөнгө тормош ожмах кеүек.*



*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# ТАРИХТЫ ХӘТЕР ЙӘШӘТӘ



**"Әгәр тыл ярҙам итмәһә, беҙ һуғышта еңә алмаҫ инек", - тигән маршал Жуков. Һикһән йылға яҡын ваҡыт үтһә лә, был һүҙҙәр әле лә көнүҙәк булып ҡала.**

Бөгөн махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙға республикабыҙ гуманитар ярҙам ебәргән һайын, ошо һүҙҙәр яңынан иҫкә төшә. 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында ла бит кешеләр үҙ балаларының ауыҙҙарынан өҙөп, бөтә аҙыҡ-түлекте фронтҡа ебәреп торған. Асыҡһалар ҙа, өшөһәләр ҙә, көнөтөнө баҫыуҙарҙа, заводтарҙа эшләгәндәр, урман ҡырҡҡандар, һал ағыҙғандар. Көндөҙ колхоз ерендә тир түкһәләр, төндә йылы ойоҡбаштар, өс бармаҡлы бирсәткәләр бәйләгәндәр, картуф киптергәндәр.

Әле лә шулай түгелме ни? Айырмаһы: шөкөр, үҙебеҙ ас ултырмайбыҙ. Республика халҡы махсус операцияла ҡатнашыусыларға нимәләр генә ебәрмәй: күсермәле мунсалар, яғырға утындар, баҡтырылған иттәр, һалмалар, сәк-сәк, бауырһаҡтар, йылы эске кейемдәр, ойоҡбаштар... Ҡыҫҡаһы, тыныс тормошта кешеләргә нимә кәрәк, алғы һыҙыҡта, ут эсендә йөрөгәндәргә лә шундай әйберҙәр менән тәьмин итәләр. Фронт һәм тыл берҙәмлеге генә еңеү килтерәсәген яҡшы аңлай халҡыбыҙ.

...Беҙ, апайым шағирә Миңлегөл Хисамова менән, һуғыштан һуң тыуған балалар. Атайыбыҙ Сәлимйән Ноғман улы Ҡотлогилдин яу ҡырынан яраланып, ҡаты сирләп ҡайтҡан. Әйтерһең, беҙгә ғүмер бирер өсөн генә иҫән ҡалған. Әсәйебеҙ Миңһылыу Шәрифйән ҡыҙы һуғыш башланғанда 13 йәштә булып, тракторсылар курсында уҡып, бөтә ауыр эште башҡарған. Ашарға ризыҡ, кейергә кейем булмаған. Әммә уларға дошманды еңеүгә ышаныс, өмөт, рух көс биргән. Атайым менән бер нисә йыл ғына йәшәп ҡалған әсәйем. 25 йәштә ике бала менән тол ҡалған. Һуғыштан һуң да тормош еңел генә булып китмәгән бит әле. Ана шул ауырлыҡтар әсәйебеҙҙе аяҡһыҙ ҡалдырҙы инде, ике тиҫтә йылдан ашыу ҡул, аяҡ быуындары һыҙлап, атлауҙан мәхрүм булып ятты.

Атайым менән әсәйемдең яҙмышы, һуғыш осоро балаларының күргән ауырлыҡтары, уларҙың хәтирәләрен яҙып алырға этәрҙе. Бөйөк Еңеүҙең 65, 70 һәм 75 йыллыҡтарына арнап яҙылған документаль иҫтәлектәрҙе Башҡортостан "Китап" нәшриәте өс китап итеп баҫып сығарҙы. Унда Башҡортостан районларынан тыш, күрше өлкәләр, республикаларҙан да һуғыш балаларының һөйләгәндәре тупланды. "Һуғыш балалары - тарих яралары", "Һуғыш яралаған бала саҡ", "Һуғыш балалары һөйләй" тигән китаптарға 300-ләп иҫтәлек тупланды, Ленинград блокадаһынан Башҡортостанға эвакуация менән килеп, беҙҙә йәшәргә ҡалған, Украинаның Ворошиловград (хәҙерге Луганск) өлкәһенән килгән, хәҙер инде хөрмәтле ветерандарҙың һөйләгәндәре лә индерелде ул китаптарға.

Инде ҡырҡ биш йыллап ғүмеремде ошо эшкә арнаным. Һуғыш балаларының иҫтәлектәрен яҙып йөрөгәндә миңә 3 кеше генә, беҙ һуғышта ҡыйынлыҡ күрмәнек, тине. Ниндәй ғаиләлә үҫкәндәрҙер, белмәйем, улар менән артабан әңгәмә ҡороп тороуҙы кәрәкле тапманым. Ә ауырлыҡ күргәндәрҙең иҫтәлектәрен тыныс ҡына тыңлау мөмкин түгел. Улар һөйләгәндә ҡушылып илап ултыраһың. Һәр иҫтәлек буйынса күләмле әҙәби әҫәр яҙырға, фильм төшөрөргә булыр ине.

Өс китап булды, инде башҡа был эшемде дауам итмәҫмен, тип уйлайым. Ләкин һуғыш балаларының әле оло йәштә лә әүҙем тормош менән йәшәп ятыуын күреп, хатта махсус хәрби операциялағы яҡташ һалдаттар өсөн гуманитар ярҙам йыйыуҙа ҡатнашыуҙарын белеп, дүртенсе китап өсөн дә иҫтәлектәр туплай башланым. Араларында 100 йәшкә еткәндәр ҙә, 90-ды үткәндәр ҙә бар. Аҡылдары камил, зиһендәре теүәл, хәтерҙәре шәп. Ошо көндәрҙә генә Баймаҡ, Сибай яҡтарында йөрөп ҡайттым. Былтыр яҙ Йәрмәкәй, Әбйәлил яҡтарында булдым. Өфөләге һуғыш балалары менән дә осрашам. Өлкән йәштәге тыл ветерандарының рух көсөнә хайран ҡалам. Бөгөн ҡыйһы бер йәштәр заман ауырлығына зарланырға ярата. Иҫән кешегә тегеһе лә, быныһы ла етмәй. Ә һуғыш балалары барыһына ла шөкөр итеп йәшәй. Юҡлыҡты, мохтажлыҡты, аслыҡ-яланғаслыҡты кисергән ветерандар өсөн бөгөнгө тормош ожмах кеүек. Улар махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙарға изге теләктәрен еткерә, изге доғаларын юллай. Илдә именлек кенә булһын, тип теләй улар. Амин, шулай булһын!

Хәҙер республикабыҙҙа ла, тотош илебеҙ буйынса ла һуғыш ветерандары бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалып бара. Әммә яу йылдары шаһиттары - һуғыш балалары иҫән әле. Һәр өйҙә һуғыш хәтирәләре йәшәй. Кемдәрҙеңдер атай-олатайҙары, балалары һәләк булған. Уларҙың яу ҡырынан яҙған өскөл хаттары һандыҡ төптәрендә генә түгел, хәтер төпкөлдәрендә һаҡлана. Тарихты хәтер йәшәтә. 27 миллионға яҡын кеше ғүмерен ҡыйған һуғыш бер ваҡытта ла онотолмаясаҡ.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

*ҠЫҪҠАСА*

## ХӘТЕР ПОЕЗЫ КИЛӘ

**Рәсәй менән Беларусь төбәктәренең X форумы сиктәрендә 27 июндә Өфөгә "Хәтер поезы" килә. Уның маршруты ике ил ҡалалары аша үтә. Ғәҙәти булмаған состав пассажирҙары - төрлө олимпиадаларҙа, конкурстарҙа еңгән 200 уҡыусы.** "Проект ике ил йәштәрен берләштереүгә, атай-олатайҙарҙың ҡаһарманлығының әһәмиәтен аңлауға һәм уларға ҡарата ихтирам тәрбиәләүгә, күрше дәүләттең мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән танышыуға йүнәлтелә", - ти Александр Клебанов. Рәсәй менән Беларусь төбәктәренең X форумы 26-28 июндә Өфөлә үтә. Сара 2014 йылдан алып уҙғарыла. Уның төп бурысы булып Беларусь Республикаһы менән Рәсәй Федерацияһының берләшеү процестарын тәрәнәйтеү, парламент-ара, сауҙа-иҡтисади, мәҙәни бәйләнештәрен нығытыу, эшлекле контакттарҙы киңәйтеү, ике яҡлы хеҙмәттәшлектең перспективалы йүнәлештәрен үҫтереү тора.

✓ **2023 йылдың 1 сентябрендә Башҡортостандың урта махсус һәм юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге стипендияның күләме 5 мең һумға тиклем арттырыла.** Хәбәр ителеүенсә, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге стипендия 2006 йылда булдырылған. Йыл һайын республика юғары уҡыу йорттарының - 5, колледждарҙың 20 студентына ошондай түләү тәғәйенләнә. Быға тиклем исемле стипендияның күләме урта махсус уҡыу йорттарында - 600 һум, юғары уҡыу йорттарында 1200 һум ине. Ошо йылдар эсендә стипендияға 250-нән ашыу студент лайыҡ булған. Уларҙың уңышы Башҡортостан халыҡтарының туған телдәрен өйрәнеүгә һәм уҡыуҙағы йәки ғилми эшмәкәрлектәге ҡаҙаныштарына бәйле.

✓ **Сәнәғәт ипотекаһы программаһына (предприятиеларға сәнәғәт етештереүе өсөн күсемһеҙ милек һатып алыуға льготалы кредиттар биреү) 1 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә.** Тейешле ҡарарға Премьер-министр Михаил Мишустин ҡул ҡуйған, тип хәбәр итә Рәсәй Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. Президент ҡушыуы буйынса 2022 йылдың сентябрендә сәнәғәт ипотекаһы программаһы эшләй башланы һәм бизнес яғынан ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Программа сиктәрендә кредиттар йылына 5 процент льготалы ставка менән 7 йылға тиклем бирелә. Инновацион технологик компаниялар өсөн ставка йылына 3 процент тәшкил итә. Кредиттың максималь суммаһы - 500 миллион һум. Льготалы һәм баҙар ставкалары араһындағы айырманы банктарға дәүләт ҡаплай. Бойороҡҡа ярашлы бүленгән аҡсаны иҫәпкә алып, 2023 йылда программаны субсидиялауҙың дөйөм күләме 1,3 миллиард һумдан ашып китә.

✓ **Тиҙҙән Кубала Рәсәйҙең "Мир" түләү системаһы эшләй башлай. Был хаҡта Рәсәйҙең Гаваналағы илсеһе Андрей Гуськовҡа һылтанма менән "Российская газета" хәбәр итә.** Дипломат һүҙҙәренсә, Кубала "Мир" түләү системаһын ғәмәлгә индереүгә әҙерлек тамамланып килә. Утрауға Рәсәйҙән туристар ағымының артыуын көтөргә мөмкин, тип өҫтәне Гуськов. Гавана 2021 йылдың аҙағынан алып Милли түләү карталары системаһы менән берлектә Рәсәйҙең системаһын индереү өҫтөндә эшләй. Әлеге көндә "Мир" карталарын Абхазияла, Әрмәнстанда, Белоруста, Вьетнамда, Ҡаҙағстанда, Ҡырғыҙстанда, Тажикстанда, Көньяҡ Корея һәм Көньяҡ Осетияла ҡулланырға була. Хәҙер Яҡын Көнсығыш, Латин Америкаһы, Көньяҡ-Көнсығыш Азия илдәрендә һәм Ҡытайҙа "Мир" карталарын файҙаланыу тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла. 2022 йыл йомғаҡтары буйынса "Мир" системаһы карталарын сығарыу 60 процентҡа артҡан. Әлеге ваҡытта 182 миллион карта сығарылған.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Лимон

❖ Шәкәр диабеты булғанда көнөнә 1 стакан лимон һутын бүлеп-бүлеп эсергә кәңәш ителә.

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә тәүлегенә 3-4 тапҡыр яртышар лимонды әрсемәй ашау файҙалы.

❖ Ҡан баҫымы түбәнәйгәндә 1 лимон һутына 50 грамм ҡыҙҙырып тартылған ҡәһүә һәм 0,5 грамм бал ҡушырға. Ашағандан һуң 2 сәғәт үткәс ҡатышманы 1-әр балғалаҡ ашарға.

❖ Температура күтәрелгәндә 1 стакан йылы һыуға 1 ҡалаҡ лимон һуты ҡушып эсергә. Был осраҡта ла температура төшмәһә, лимонлы һыу менән һөртөнөргә.

### Етен

❖ Аяҡтар шешенгәндә 4 ҡалаҡ етен орлоғон 1 литр һыуға һалып, 10-15 минут ҡайнатырға. Йылыла 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙмәһәң дә була. Тәм өсөн лимон йәки емеш һуты ҡушырға мөмкин. Көн дауамында 6-8 тапҡыр, һәр 2 сәғәт һайын яртышар стакан эсергә. Эҫе көйө эсеү яҡшыраҡ. Файҙаһы 2-3 аҙнанан белене.

### Крыжовник

❖ Бөйөр һәм бәүел ҡыуығы шешкәндә 2-3 аҙна дауамында даими рәүештә көнөнә 3 тапҡыр 1-әр стакан крыжовник ашап, хәлде яҡшыртырға мөмкин.

❖ Ниндәй генә сәбәптән аҙ ҡанлылыҡ килеп тыумаһын, 3-4 аҙна дауаланған осраҡта ҡан формулаһы нормаға килә. Бигерәк тә өлкән йәштәгеләргә һәм балаларға ярҙам итә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1/4-1/3 стакан крыжовник ашарға.

### Андыҙ

❖ Төрлө урындағы яман шештәрҙән 200 грамм киптерелгән андыҙ (девясил высокий) тамырын яҡшылап онтаҡларға (тәүҙә ваҡлап торарға, шунан ҡәһүә тартҡыстан үткәрергә). Шул ондо 500 грамм балға ҡушып, болғарға. Бер тәүлек тоторға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ Башҡортостанда Мәжитов мәктәбе йәшәй һәм үҫешә. Археологик белемде, тикшеренеүҙәрҙе популярлаштырыу буйынса ҙур эш алып барыла. Нияз Мәжитов һәр саҡ ошо хыял менән йәшәне һәм уны алға һөрҙө.***

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны билдәһеҙ. Оҙонлоғо 55 см, өҫкө киңлеге 27 см, аҫҡы киңлеге 37 см, ауырлығы 1641,2 г. Биҙәнеү әйберендә барлығы 321 элемент. Шуларҙың 88-е - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Учалы ҡалаһы. Оҙонлоғо 37 см, өҫкө киңлеге 22 см, аҫҡы киңлеге 30 см. Биҙәүестә барлығы 242 элемент. Шуларҙың 161-е - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Илсе ауылы. Оҙонлоғо 34 см, өҫкө киңлеге 21 см, аҫҡы киңлеге 26 см.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

**Батырҙарын, арҙаҡлы шәхестәрен күтәргән милләттең киләсәге бар, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Республикала был йәһәттән ҙур эштәр башҡарыла. Ошо көндәрҙә Өфөлә билдәле тарихсы, тарих фәндәре докторы, башҡорт археологияһына нигеҙ һалыусы ғалим Нияз Мәжитов йәшәгән йортта иҫтәлекле таҡтаташ асылды. Тантанала уның яҡындары, коллегалары, уҡыусылары, яҡташтары йыйылды.**

# АТАЙ УЛЫ ҒЫНА ТҮГЕЛ,

## халыҡ улы булды...



–Нияз Абдулхаҡ улы - археологияның бик күп серҙәрен асҡан титандар дәүеренән. Археология фәнендә ул иң сағыу эҙ ҡалдырҙы, уның хеҙмәттәре республиканы яңы кимәлгә сығарҙы. Илдең археология картаһында Башҡортостан бөгөн иң ҡыҙыҡлы археологик мираҫ объекттарына бай субъект булып тора, - тине тантананы асып ваҡиғаны ойоштороусы, БР Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин. - Нияз Мәжитов Көньяҡ Уралдың киң күләмле урта быуат археологик ҡомартҡыларын аса һәм тикшерә. Уларҙың классификацияһын эшләүгә, Урал-Волга буйының тимер быуаты һәйкәлдәрен, ялан Евразияһы халыҡтарының этномәҙәни һәм социаль-иҡтисади тарихын осорҙарға бүлеүгә ҙур өлөш индерә.

БР Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ начальнигы Салауат Ҡолбахтин билдәләүенсә, Нияз Абдулхаҡ улы арҡаһында республиканан ситтә лә башҡорттар һәм уларҙың тарихы, бай мәҙәни мираҫ тураһында беләләр.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының хәҙерге рәйесе, Нияз Абдулхаҡ улының уҡыусыһы Юлдаш Йософов Мәжитов кеүек шәхестәрҙең республика, башҡорт халҡы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булыуын билдәләне: "Нияз Мәжитов ғалим булараҡ ҡына түгел, ә әүҙем граждандлыҡ позицияһы, йәмәғәтселек эшмәкәрлеге менән дә йәмғиәттә лайыҡлы урын алып торҙо - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының беренсе рәйесе, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы етәксеһе булды. Нияз Абдулхаҡ улы фән, мәҙәниәт өлкәһендә лә, йәмәғәт эшмәкәрлегендә лә һөҙөмтәле эш алып барҙы. Беҙ уның иҫтәлеген мәңгеләштерергә, Башҡортостан өсөн ниндәй роль уйнағанын аңларға һәм баһаларға тейешбеҙ", - тине ул.

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең Р. Кузеев исемендәге Этнологик тикшеренеүҙәр институты директоры Сергей Емелин әйтеүенсә, тарих - ул фәндән ҙурыраҡ. Бының шулай икәнен Нияз Мәжитов миҫалында ла күрергә мөмкин. "Нияз Абдулхаҡ улы тарих фәне аҡһаҡалдарының береһе булды һәм бөйөк археолог ине. Үҙенең эшмәкәрлеге менән ул фәнни мәктәп кенә булдырып ҡалманы, ә бөйөк ғалим булды, төрлө тармаҡтарҙа эшләүселәрҙе, шул уҡ ваҡытта күңелендә һәр саҡ тарихсы булып ҡалыусыларҙы, йәне-тәне менән нимәгәләр мөкиббән бирелеүселәрҙе, ижади ҡарашлы һәм юғары һөҙөмтәләргә өлгәшеүселәрҙе ылыҡтыра алды, - тине ул һәм институтта беренсе тапҡыр билдәле Троя алтыны күргәҙмәһенең Мәскәүҙәге Пушкин музейынан сығарылып, Өфөгә килтерелеүе тураһында билдерҙе. - Был ваҡиға ла осраҡлы түгел - Башҡортостан тарихсылары һәм археологтары - Нияз Абдулхаҡ улының уҡыусылары һәм уның эшен дауам итеүселәр был эштә әүҙем ҡатнашты.

Нияз Мәжитовтың ҡыҙы, тарих фәндәре кандидаты Әлфиә Солтанова сараны ойоштороусыларға һәм ҡатнашыусыларға рәхмәтен белдереп, атаһы тураһында хәтирәләре менән бүлеште. "Ваҡыт үткән һайын кешенең бөйөклөгө асыҡ күренә. Бөгөн ошо сараға килеүселәрҙең һәм атайымды хөрмәтләп иҫкә алыусыларҙың күп булыуы уның бушҡа йәшәмәгәнен күрһәтә. Халҡына, фәнгә, мәғарифҡа биргән көсө мөмкинлеге, һәләте уға хәтер булып өсләтә әйләнеп ҡайта", - тине Әлфиә Нияз ҡыҙы.

Коллегаһы, тарих фәндәре докторы Нәзир Ҡолбахтин Мәжитовты үҙенең рухи атаһы тип атаны. "Иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйыу - бөйөк ғалимға ихтирам билдәһе ул. Нияз Абдулхаҡ улы менән өсөн уҡытыусы ғына түгел, рухи атай булды. Оҙаҡ йылдар бергә эшләнек. Уның саҡырыуы буйынса заманында Археология, боронғо һәм урта быуат тарихы кафедраһында 13 йыл мөдир булдым, ә ул - кафедра профессоры ине. Уны юғалтыуҙы үҙ атайым вафат булған кеүек ҡабул иттем, әле лә йөрәк һыҡрай, - тине ул. - 1970-1990 йылдарҙа республикала Нияз Мәжитов менән Раил Кузеев кеүек ике титан эшләне. Уларҙың һәр ҡайһыһының фундаменталь йүнәлеше бар ине, шул уҡ ваҡытта уларҙың эргәһенә тарихсыларҙың тотош армияһы тупланды, уларҙың үҙ мәктәбе булды. Улар, үҙ темаларын өйрәнеүҙән тыш, башҡа бик күп проблемаларҙы тикшереү буйынса йүнәлеш бирҙе. Икеһенең дә уҡыусылары, аспиранттары бихисап ине һәм 30 йыл дауамында улар тарих фәне үрендә торҙо. Улар киткәс, тарих фәне лә түбәнәйә башланы. Уларҙы алмаштырырлыҡ кешеләр юҡ кимәлендә. Факультетыбыҙҙа 1990 йылдарҙа 13 фән докторы эшләне. Әгәр Нияз Мәжитов менән Раил Кузеев ғалим булһа, беҙ улар менән сағыштырғанда өйрәнсек кенә инек. Мин профессор, тарих фәндәре докторы булһам да, үҙемде ошо бөйөк кешеләрҙең тиңе тип түгел, ә уҡыусыһы тип иҫәпләйем. Бөгөн беҙгә Мәжитов кеүек ҡеүәтле локомотив кәрәк".

Башҡортостанда Мәжитов мәктәбе йәшәй һәм үҫешә. Археологик белемде, тикшеренеүҙәрҙе популярлаштырыу буйынса ҙур эш алып барыла. Нияз Мәжитов һәр саҡ ошо хыял менән йәшәне һәм уны алға һөрҙө. Уның фиҙаҡәрлеге арҡаһында республикала фәнни тикшеренеүҙәр системалы рәүештә алып барыла башланы. Археологияға йөштәр килде.

Өфө фән һәм технологиялар университетының тарих һәм дәүләт идаралығы институты директоры Әминә Уразова белдереүенсә, ҡасандыр Нияз Мәжитов эшләгән юғары уҡыу йортонда уның башлаған традицияларын уҡыусылары һаҡлап, дауам итә. "Институт базаһының һаҡлау фондында археология коллекциялары тупланған, Нияз Мәжитов исемендәге археология музейы булдырылған. Археологияны өйрәнеүсе талиптар беренсе курстан башлап археологик тикшеренеүҙәргә йәлеп ителә. Республикабыҙ ингән Евразия киңлеге Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Тажикстанды, Рәсәйҙең Евразия киңлеген берләштерә. Заманында башында Нияз Абдулхаҡ улы торған археология фәне бөгөн Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың геосәйәси идеяларын тормошҡа ашырыусы булып тора. Республика Башлығы Радий Хәбиров юҡҡа ғына Евразия күсмәндәре цивилизацияһы музейын булдырыу тураһында ҡарар итмәне", - тип билдәләне ул.

Тантанаға йыйылыусыларҙың һәр ҡайһыһынан һораһаң да, улар Нияз Абдулхаҡ улының булмышындағы ыңғай сифаттарҙы сәғәттәр буйы һөйләр ине, моғайын. Ул ысын мәғәнәһендә атай улы ғына түгел, республика улы, халыҡ улы булды, бар ғүмерен башҡорт халҡын донъя кимәленә сығарыу маҡсатына арнаны һәм быға өлгәште лә. Беҙгә иһә уның эшен артабан да популярлаштырырға, дауам итергә, асыштарын һаҡларға ғына кәрәк.

**Айгөл ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

*✓ 58-се гв. атлы полкының 3-сө эскадроны пулеметсыһы Александр Баранов, алғараҡ сыға биреп, ҡыуаҡтар араһында позиция биләй. Немец танкылары үтеп киткәс, бер ни ҙә һиҙмәй килгән дошманды ҡырып һала.*

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Төньяҡ Урал гун эпохаһында

Археология материалдары Көньяҡ Урал ҡәүемдәренең сәйәси һәм мәҙәни тормошо үҫешенең темпы һәм характеры Кангюй мәнфәғәттәренең төньяҡ сиктәрендәге әүҙемлеге менән бәйле булыуын күрһәтә. Беҙҙең эраның беренсе быуаттарында йәшәгән Боронғо Ҡытай тарихсылары яҙмаларында Кангюйҙың Янь иленән яһаҡ рәүешендә ҡиммәтле мех тиреләр сығарыуы хаҡында иҫкә алына. Улар "Кангюй Давандән (хәҙерге Коканд) төньяҡ-көнбайышҡа табан 2000 ли тиерлек алыҫлыҡта ята", ә "Кангюйҙан төньяҡ-көнбайышҡа 2000 ли йыраҡлығында Яньцай дәүләте урынлашҡан, уның 100 меңләп ғәскәре бар һәм ул йәшәйешендә Кангюйға оҡшаш. Ул бөйөк күл буйына йәнәш ята, уның ярҙары тәпәш. Был төньяҡ диңгеҙе", - тип яҙа. Хәҙерге заман комментаторҙарының берҙәм уртаҡ фекеренә ярашлы, Боронғо Ҡытай тарихсылары иҫкә алған төньяҡ диңгеҙе - Каспий диңгеҙе һәм, шулай булғас, Яньцай иле биләмәләренә Төньяҡ Каспий буйындағы сак-усунь-гун ерҙәре ингән. Яньцай иленән һәм Кангюйҙан төньяҡтараҡ "Янь биләмәләре (иле. - Н. М., Ә.С.); ...Кангюйға буйһоноп йәшәй, уға сысҡан затынан булған йәнлек тиреләре менән яһаҡ түләй". Кангюйҙан төньяҡтараҡ йәнлек тиреһенә бай булған бер генә урынды - Көньяҡ Уралды атап була. Бындағы халыҡтың буйһондоролған булыуын иҫәпкә алып, ошо замандағы Көньяҡ Уралды ҙур һәм киндәрҙән булған Кангюй дәүләтенең төньяҡ сиге итеп ҡарау өсөн ерлек бар.

Боронғо Ҡытай сығанаҡтарында Янь биләмәһе (ере) иҫкә алынған икенсе вариант бар. Мәҫәлән, ошо сығанаҡтарҙы өйрәнеүсе компетентлы тикшеренеүселәрҙең береһе Ю.А. Зуев (Ҡаҙағстан) белдергәнсә, сун ғалимы Пей Сунчжи үҙенең "Өс батшалыҡты тасуирлау, 220-264 й.й." тигән китабында ошолай яҙа: "Тағы ла Лю дәүләте бар, Янь дәүләте бар һәм тағы ла Яньцай дәүләте бар, икенсе төрлө Алань тип йөрөтөлә. Улар барыһы ла Канцзюй менән бер үк йола тота". Ҡытай авторы әҫәренә һылтанып, Ю.А. Зуев "Һуң Хань тарихы, 25-220 й.й." исемле хеҙмәттә беҙҙе ҡыҙыҡһындырған тема буйынса ошондай мәғлүмәт булыуы хаҡында яҙа: "Янь дәүләте Яньцайҙан төньяҡтараҡ урынлашҡан, ул Канцзюйға буйһона. Бынан кеш тиреләре килтерелә". Ошо сығанаҡтарға аңлатма биреп, Ю.А. Зуев Яньцай дәүләтенең Арал һәм Каспий диңгеҙҙәре арауығындағы ерҙәрҙә урынлашыуын һәм Янь дәүләтенең Көньяҡ Урал территорияһын биләүен тағы ла бер тапҡыр раҫлай. Әйткәндәй, япон тикшеренеүсеһе Сиратори шундай уҡ ҡараштта булып, бер махсус хеҙмәтен ошо темаға арнаған. Ю.А. Зуевтың китабындағы әлегә тиклем билдәле булмаған сығанаҡтар беҙҙең эра сиктәрендәге Көньяҡ Урал ҡәбиләләре торошона һәм ижтимағи-сәйәси тарихына өр-яңы ҡараш булдырыу мөмкинлеген бирә, атап әйткәндә: был мәсьәләне ҡуйғанда һәм тикшергәндә урындағы ҡәбиләләрҙең үҙ дәүләти ойошмалары булыуы, уларҙың Ҡаҙағстан һәм Урта Азия халыҡтары менән иҡтисади-сауҙа һәм мәҙәни-сәйәси бәйләнештәргә әүҙем ылыҡтырылыуы фактын иҫәпкә алыу фарыз.

### Усундәр

Ҡытай сығанаҡтарында усунь (уйсун) ҡәүемдәренең дәүләте хаҡында тәүләп б.э. тиклем III-II быуаттар сигендә иҫкә алына. Был дәүләт Ете йылға - Жетысу территорияһында, Алакүл күленән Кангюй иле сигендәге Талас йылғаһына тиклемге арауыҡты биләй. Усундәрҙең көнсығыш сиктәре, күрәһең, Көнбайыш Монголия һәм Ҡытай ерҙәренә тиклем барып еткән. Усундәр хаҡында ҡытай сығанаҡтарында ошондай мәғлүмәт бар: "Усундә аттар күп. Уларҙың иң бай кешеләренең дүрт-биш мең аты бар".

Күршеләре, бигерәк тә хунну (гундар) һәм кангюйҙар, батыр һәм һуғышсан усунь халҡы менән иҫәпләшеп йәшәргә мәжбүр була. Чигучэнь ҡалаһы Усунь дәүләтенең башҡалаһы була, ул "ҡыҙыл үҙән ҡалаһы" тигәнде белдерә. Усундәр һәм гундар араһында хәрби конфликттар даими булып тора, әммә уларҙың кангюйлылар менән дә бәрелешкән мәлдәре була.

Ҡытай һәм Усунь дәүләте араһында дипломатик мөнәсәбәттәр булдырыла. Бер-береһенә ҡарата булған йоғонтоларын көсәйтеү өсөн Усунь бөйөк түрәләрен һәм уларҙың улдарын Ҡытай принцессаларына өйләндереү йолаһы үтәлә. Мәҫәлән, 90 йәшенә етеп килгән Усунь хакимы Куньбиның Синьзюнь исемле принцессаға өйләнеүе хаҡында Ҡытай хикәйәте бар. Ҡарт хакимдың йәш кәләше тыуған яҡтарын һағына, ул һағышына түҙә алмай, йырлап булһа ла күңелен асырға тырыша. Уның йыры хәҙерге заманға тиклем килеп еткән һәм Ҡытай поэзияһының сағыу өлгөһө итеп иҫәпләнә:

*"Кейәүгә бирҙеләр,*
*бик алыҫ был ер,*
*Усунь хакимы*
*миңә булды йәр.*
*Оҡшаш ҡыуышҡа*
*йәшәгән өйөм,*
*Кейеҙ тирмәмдә*



*һағыштан көйәм.*
*Ашаған ашым -*
*һөт менән ит кенә.*
*Көйәм нык итеп,*
*яна йөрәгем.*
*Аҡҡоштай осоп*
*ҡайтаһы ине."*

Әйтергә кәрәк, усундәрҙең байтағы беҙҙең эра сиктәрендә, III - IV быуаттарға тиклем, Үҙәк Азия күскенселәренең (гундарҙың) миграцияһына йәлеп ителә; уларҙың ниндәйҙер бер өлөшөнөң Көньяҡ Уралда тороп ҡалыуы хаҡында фараз итеп була. Сөн гидронимының шул уҡ усунь атамаһының бер варианты итеп ҡарау мөмкинлеге хаҡында һүҙ йөрөтөп була. Усундәрҙең йә иһә уларҙың вариҫтарының Көньяҡ Уралда ҡалдырған эҙҙәре Ауырғазы районынындағы Уҡсунны (Уҡсунлы) атамаһында ла сағылыш тапҡан кеүек: ошо атаманың "сунны" тамырының "усунь" һүҙенә ауаздашлығы беленеп тора. Был миҫалдарҙы топонимика белгестәре профессиональ кимәлдә анализлай алыр ине, әммә беҙгә, археологтарға, ошо рәүешле усундәрҙең Көньяҡ Уралдағы эҙҙәрен күҙаллау нигеҙле булып тойола. Табын башҡорттарының, шулай уҡ ҡаҙаҡ табындарының легендар бабаһының Уйсын исеме ошо этнонимдың бер варианты рәүешендә ҡабул итеп була (был турала XIII бүлектә ентекләберәк яҙылды). Ҡаҙаҡ ғалимдары фекеренсә, "уйсын" атамаһы "усунь" этнонимынынан килеп сыҡҡан.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Гомель-Речица операцияһында

Беҙҙең артиллеристарыбыҙ Ниғмәт Ирназаров, Әҙел Мусин, Миндеғол Арыҫланов, Янғәле Кәримов, мәргән атып, немец танкыларын емертә, дошман һалдаттарын кире сигенергә мәжбүр итә. 58-се гв. атлы полкының 3-сө эскадроны пулеметсыһы Александр Баранов, алғараҡ сыға биреп, ҡыуаҡтар араһында позиция биләй. Немец танкылары үтеп киткәс, бер ни ҙә һиҙмәй килгән дошманды ҡырып һала: етмешкә яҡын немец офицеры һәм һалдаты ошо тиндәшһеҙ алышта сафтан сығарыла.

Өлкән лейтенант Петр Язенко эскадронына ике ротаға яҡын дошман пехотаһы ябырыла. Шул саҡта Сафый Ғибаҙуллин һәм Сағман Ҡоҙаяров, ағас араһында йәшеренеп торған ерҙәренән тачанкалары менән сабып килеп сығып, һөжүм итеп килеүсе дошманға көслө ут аса. Эскадрон командиры уларға ярҙамға автоматсылар төркөмөн ебәрә, юғалтыуҙарға дусар ителгән немецтарға яу яланын ҡалдырып китеүҙән башҡа сара ҡалмай.

Әхтәм Ихсандың "Саҡма тояҡ аттарҙа" тигән китабында Малодуш ауылы янындағы алышта батырлыҡ күрһәткән яугирҙарыбыҙҙың исем-шәрифтәре теркәлгән: автоматсылар Яңыбай Ҡалмырҙин, Ульябай Дәүләтсурин, минометсыларҙан батарея командиры, гв өлкән лейтенанты Вахит Сәйетов, взвод командиры, гв. кесе лейтенанты Хәсән Ғәйнуллин, рядовойҙар Нуретдинов, Талипов, Ткачев; танкыға ҡаршы ата торған мылтыҡ (ПТР) взводынан - Ҡотлоәхмәт Хәйбуллин, Ғафур Сабашев; разведчиктар - Хәҙис Зарипов, Сәйет Яңыбаев, Иҙрис Ҡасҡынов.

58-се гв. атлы полктың хәрби хәрәкәттәре журналында шул уҡ Малодуш ауылы янында ҡыйыу алышҡан гвардиясыларҙан гв. кесе лейтенанты Әхмәтшин, старшина Фәхретдинов, санинструктор Ноғоманов, ПТР взводы яугирҙары Буранбаев, Сәхәповтың исемдәре теркәлгән. Немецтарҙың алдан әҙерләнгән оборона нығытмаларын алыу беҙҙең яугирҙарыбыҙға ауырға төшә, дошман көслө ҡаршылыҡ күрһәтә, үкенскә күрә, яу ҡырында яраланғандарҙың, һәләк булғандарҙың һаны арта бара. 4-се эскадрон командиры, гв. өлкән лейтенанты Анатолий Рудой ҙа ошо яуҙа башын һала, уға үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Яу барышында полктың артиллерия командующийы, гв. капитаны Лисицкий, 1-се эскадрон командиры, гв. өлкән лейтенанты Әхмәтов та яралана.

Беҙҙең 58-се гв. атлы полкының хәрби операцияһы уңышлы тамамлана: дошмандың Гомель төркөмө частарына Речица йүнәлешендә хәрәкәт итеү юлы ябыла, бик күп немец офицерҙары һәм һалдаттары сафтан сығарыла.

65-се армия командующийы, генерал-лейтенант Павел Иванович Батов, полк яугирҙарының ҡаһарманлығын юғары баһалай, полк командиры, гв. подполковнигы Таһир Тайып улы Күсимовҡа рәхмәт белдерелә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*



# НАГРАДАЛАР ТЕРГЕҘЕЛДЕ

**"Башнефть" компанияһы 90-сы йылдарҙа юҡҡа сығарылған хеҙмәт наградаларын кире ҡайтарҙы. Рәсәй Федерацияһы Дәүләт архивынан алынған документтар нигеҙендә "Госзнак"акционерҙар йәмғиәте элекке номерҙарын файҙаланып, Ленин ордены менән Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденын ҡайтанан эшләне. Награда материалдарын тергеҙеү 2017 йылда "Башнефть" "Роснефть" нефть компанияһы составына ингәндән һуң башланғайны.**

Башҡорт нефтселәренең хеҙмәт данын мәңгеләштереү илебеҙҙең бай тарихи мираҫын һаҡлау буйынса "Башнефть"тең социаль башланғыстарының мөһим өлөшө булды. Үҙенең 90 йылдан ашыу тарихында "Башнефть" коллективы бөйөк хеҙмәт ҡаҙаныштары өсөн бик күп наградаларға лайыҡ булғайны. Шулар араһындағы иң әһәмиәтлеләре - дүрт Ленин ордены, өс Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ һәм бер Октябрь Революцияһы ордендары.

Ленин орденына башҡорт нефтселәре 1966 йылда нефть табыуҙы арттырғаны, яңы нефть ятҡылыҡтарын үҙләштереүҙе тиҙләткәне, яңы техника һәм алдынғы технологияны киң файҙаланыуға индергәне өсөн лайыҡ булһа, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены 1982 йылда нефть сәнәғәтен үҫтереүҙәге ҙур ҡаҙаныштары, юғары техник-иҡтисад күрһәткестәргә өлгәшкәне һәм социалистик йөкләмәләрҙе уңышлы үтәгәне өсөн тапшырылғайны. Ҡыҙғанысҡа күрә, үткән быуаттың 90-сы йылдарында "Башнефть" етештереү берекмәһенең Ленин һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары эҙһеҙ юғалтылғайны. Ләкин бына 20 йылдан ашыу ваҡыттан һуң юғары хеҙмәт даны наградалары тергеҙелде һәм компанияның музейына тапшырылды.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены 1928 йылдың 7 сентябрендә СССР-ҙың Үҙәк Башҡарма Комитеты һәм Халыҡ Комиссарҙары Советы Ҡарары нигеҙендә булдырыла һәм ул етештереү, фән, мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт, халыҡ мәғарифы, һаулыҡ һаҡлау, дәүләт, йәмәғәт һәм хеҙмәт эшмәкәрлегенең башҡа өлкәләрендә Совет дәүләте һәм йәмғиәт алдында күрһәткән ҙур хеҙмәт ҡаҙаныштары өсөн тапшырыла.

Ленин ордены 1930 йылдың 6 апрелендә СССР Үҙәк Башҡарма Комитеты Президиумы Ҡарары менән булдырыла. СССР-ҙың юғары хөкүмәт наградаһы булараҡ, уның менән граждандар, коллективтар, учреждениелар, предприятиелар һәм Союздың йәмәғәт ойошмалары төрлө эшмәкәрлек өлкәләрендәге айырым ҡаҙаныштары өсөн бүләкләнгән.

*✓ Эйе, Украина тирәләй ҡуйырған хәлдәр ябай түгел. АҠШ, НАТО-ға көслө Рәсәй кәрәкмәй, шуға ла улар төрлө юлдар менән - иҡтисади яҡтан да, сәйәси яҡтан да илебеҙҙе ҡыҫырға теләй.*

**Быйыл илебеҙ 78-се Еңеү яҙын ҡаршылай. Миллионлаған ҡорбандар биреп яуланған өсөн дә ул һәр кем өсөн ҡәҙерле. Совет халҡының һәр ғаиләһе, һәр кешеһе йөрәге аша үткәнгә ул шулай баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле беҙгә. Йылдан-йыл ошо дәһшәтле һуғыш шаһиттары кәмей бара, тыл ветерандары, һуғыш балалары, тигән исемде йөрөтөүселәр сафтары ла һирәгәйә. Улар менән бергә хәтер ҙә китә. Еңеүселәр, улар хаҡында иҫтәлектәр китаптарҙа, фильмдарҙа йәшәй йәшәүен. Ләкин XX быуаттың иң оло афәтенең ғибрәте онотола. Еңгәндәр ҙә, еңелгәндәр ҙә онота уны - быны беҙ бөтөн донъяла барған һуңғы ваҡиғаларға ҡарап та аңлайбыҙ. Бына шуның өсөн дә һуғыш, ул килтергән михнәттәр хаҡында уларҙы күргән-белгәндәр һөйләргә тейеш. Сөнки хәтер шулай йәшәй. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шундай хәтирәләрҙе һөйләй алыусылар сафтары ла һирәгәйә бара. Ә шулай ҙа гәзитебеҙ биттәрендә быға тиклем донъя күргән, ошо темаға арналған сығыштарҙың (авторҙарҙың ҡайһы берҙәре был донъяла юҡ инде, ауыр тупраҡтары еңел булһын) ҡайһы берҙәрен яңыртайыҡ әле.**

# ҺУҒЫШ МИХНӘТТӘРЕ

## "Ветерандар хәҡиҡәте йәш быуынға ла һабаҡ бирһен"

*(№19, 2014 йыл)*

***Рамаҙан ҠОТОШОВ (1924-2020), Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, журналист, яҙыусы:*** Һуғыш ваҡытында окопта ятҡан мәлдәребеҙҙә "Бына ошо ҡәһәрле һуғыш бөтөр ҙә, әҙәм балаһы башҡа бер тапҡыр ҙа һуғыш ҡоралына тотонмаҫ", тип уйлай торғайныҡ. Ул һуғыш тамамланғандан һуң етмеш йылға яҡын ваҡыт үтте, әммә ошо ваҡыт эсендә донъяла бер генә тыныс көн булды микән? Йә бер урында, йә икенсе урында үлтереш уты ҡабынып ҡына торҙо. Киләһе һуғыштың Бөйөк Ватан һуғышынан да ҡурҡынысыраҡ булыуы ихтимал бит, тигән шом бер ваҡытта ла күңелгә тынғы бирмәне. Бөгөн был ҡурҡыныс йәнә илебеҙ сиктәренә үк килеп етте. Күрше Украинала болғаныш бара. Әгәр ҙә унда граждандар һуғышы башланып китһә, туғандар бер-берсеһен үлтергән ошо һуғыштан да яманы булырмы икән? Аллаһ һаҡлаһын!

Нимә уйлай әҙәм балаһы, ниңә һуғышһыҙ йәшәй алмай? Ниңә сиге булмаған, ғәҙеллек менән бүлгәндә барыһына ла еткән байлыҡтарҙы бүлешә алмайбыҙ? Ошо һорауҙар тынғы бирмәй. Һуғыш тоҡаныып китһә, кешелек бик ҡыйын хәлдә тороп ҡаласаҡ бит. Әлеге һуғышты теге һуғыш менән сағыштырыу мөмкин түгел. Теге һуғышта беҙ окоптарға йәшенһәк, иҫән ҡаласағыбыҙға шикләнмәй инек. Исмаһам, тере ҡалыу мөмкинлеге ҙур ине. Ә хәҙерге ҡоралдар, атом бомбалары - улар кешеләрҙе генә түгел, бар тереклекте юҡ итеү көсөнә эйә. Башҡортостан кеүек территориялағы бар халыҡты ҡырып бөтөү өсөн бер бомба етәсәк. Был ҡурҡыныс беҙгә генә түгел, бөтә илдәргә, халыҡтарға ла янай. Һуғыш ҡурҡынысын бөтөрөп, ҡоралланыуҙағы уҙышыуҙы туҡтатып, килешеү өҫтәленә ултырмаһаҡ, кешелек юҡҡа сығыуы мөмкин.

Әлеге көндә беҙҙең илдә идеология, уртаҡ маҡсат, ҡиммәттәр юҡ. Совет осоронда ундай идеология бар ине. Халыҡ, коммунизм төҙөйбөҙ, тип тырышты. Коммунизм идеяһы - ул яҡшы тормош, һәр кем өсөн ятраҡан хеҙмәт, балалар үҫтереү, уларға лайыҡлы белем биреү һәм башҡа изге маҡсаттарға ынтылыш идеяһы ине. Ә хәҙер нимә төҙөйбөҙ беҙ? Коммунизм идеяһын кәрәкмәгән нәмә тип юҡҡа сығарғас-сығарғас, уның урынына тормошто алға алып барырҙай башҡа идеялар уйлап сығарырға кәрәк ине бит. Хәҙер тормошобоҙҙа оло бушлыҡ барлыҡҡа килде. Уны кем тултырыр? Дингә ҡайтабыҙ, дингә ылығабыҙ, тибеҙ, әммә дин ошо бушлыҡты тулыһынса тултыра микән? Эйе, һәр ерҙә мәсеттәр ҡалҡа, әммә уларға халыҡ йөрөмәй. Дин әһелдәренең һүҙе, тауышы халыҡҡа барып етмәй әле һаман. Халыҡҡа еткерерлек итеп вәғәз тотор абруйлы дин әһелдәре лә бармаҡ менән һанарлыҡ. Ә шулай ҙа дөйөм дәүләт идеологиялары күтәрелмәгән бөгөнгө мәлдә барыбер ҙә өмөт динебеҙгә барып терәлә...

***Марат МУЛЛАҒӘЛӘМОВ, билдәле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1997-2015 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының Ветерандар советы рәйесе:*** Халҡыбыҙҙың ҡаһарманлыҡ, батырлыҡ өлгөһөн һынландырған Еңеү көнө беҙҙең республика халҡы өсөн дә ҙур байрам ул. Һандар теле менән һөйләгәндә, Башҡортостандан ғына 600 меңдән ашыу кеше фронтҡа алына. Уларҙың яртыһынан күберәге, 322 меңе, яу яландарында ятып ҡала. Беҙҙең республиканан һуғышҡа алынған яугирҙарҙың 278-е Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Улар араһында тиңһеҙ батырлыҡ өлгөһө күрһәткән - күкрәктәре менән амбразура утын ҡаплаған Матросов-Мөхәмәтйәнов, Ғөбәйҙуллин да бар. Көйөргәҙе районында Кинйә Абыҙ тип аталған ҙур булмаған башҡорт ауылы бар. Ошо ауылдан ғына ла 3 Советтар Союзы Геройы сыҡҡан.

Һуғыш йылдарында беҙҙең республика фронтҡа 160 миллион бот иген, 980 мең цетнер ит ебәргән. Республикала 5 миллион тонна нефть сығарылған, һәр өсөнсө танк, һәр бишенсе самолет беҙҙең яғыулыҡ менән йөрөгән. Тимәк, республика халҡы фронтта ла, тылда ла ошо еңеүҙе яҡынайтыуға, яулауға үҙ өлөшөн индергән. Әммә был ҙур Советтар иле халыҡтарының уртаҡ еңеүе. Шуға күрә лә ошо һуғыш ыҙаларын бергә-бергә күтәрешкән кешеләрҙең балалары, ейәндәренең дөйөм тарихыбыҙға төкөрөп тигәндәй ҡарауына йән әрней. Украинаны әйтәм... Әлбиттә, мин бар украинлылар ҙа беҙгә, Рәсәй халҡына нәфрәт менән ҡарай, тип әйтмәҫ инем. Быға ышанырлыҡ түгел. Совет осоронда Украинала булырға тура килде, ул ваҡытта әле ул союздаш республика ине. Рәсәйгә ҡарата мөнәсәбәттәре яҡшы ине ундағы халыҡтың. Башҡортостан менән дә дуҫлыҡ ептәре бәйләй украиндарҙы. Һуғыш йылдарында күп предприятиелар, дәүләт ойошмалары, зыялылар Украинанан Өфөгә эвакуацияланған. Был хаҡта беҙҙә лә, уларҙа ла яҡшы хәтирәләр һаҡлана. Шуға ла украин халҡының күпселегенең әле барған авантюраға ҡыҫылышы юҡтыр, тип ышанам.

Эйе, Украина тирәләй ҡуйырған хәлдәр ябай түгел. АҠШ, НАТО-ға көслө Рәсәй кәрәкмәй, шуға ла улар төрлө юлдар менән - иҡтисади яҡтан да, сәйәси яҡтан да илебеҙҙе ҡыҫырға теләй. Тарихтан белеүебеҙсә, был беренсе тапҡыр ғына түгел. Әммә был юлы ла беҙҙе ҡурҡытырға тырышыу килеп сыҡмаҫ, тип ышанам. Рәсәй күп милләтле дәүләт. Илһөйәрлек тә әле ҡоро һүҙ генә булып ҡалмағандыр. Шулай ҙа шомландыра. Хәлдәрҙең киҫкенләшеп китеүе бер кемгә лә файҙа килтермәйәсәге көн кеүек асыҡ. Араларҙы боҙмаҫҡа, аралашыу ишектәрен япмаҫҡа ине. Ошондай хәлдә Ҡырым, Севастополь үҙенең киләсәге өсөн дөрөҫ юл һайланы тип уйлайым. Әлеге ваҡытта Украинаның көнсығыш төбәктәренең федерализм көҫәүен дә дөрөҫ тип табам. Ни өсөн тигәндә, бер нисә милләтле дәүләт өсөн был иң уңайлы юл. Тик идеаль федераль ҡоролошо булған Американың ғына ошо талаптарға ҡаршы булыуын аңлай алмайым. Был бары Рәсәйгә баҫым яһарға тырышыу ғыналыр инде.

Эйе, беҙҙе, өлкән быуынды, илебеҙҙәге хәл ителмәгән башҡа мәсьәләләр ҙә борсой. Мин социаль пландағыларын ғына күҙ уңында тотам әле. Халыҡтың социаль хәле, социаль именлеге нимә икәнен бер ҡасан да оноторға ярамай. Ошо именлек, уңайлыҡтар өсөн халыҡ быуаттар буйы һуғышҡан, һуғышырға мәжбүр булған. Айырым кешеләр, чиновниктар, етәкселеккә яҡын булған олигархтар дөйөм байлыҡты үҙләштереүҙе туҡтатһын, халыҡҡа тәғәйен "ризыҡты" ҡомһоҙ эт кеүек ашамаһын ине, тип әйтке килә. Был бик етди мәсьәлә.

Хәл ителергә тейешле мәсьәләләрҙе һанай китһәң, осона сығып булмаҫ. Берҙән, эш хаҡтарын, пенсияларҙы тейешле кимәлгә күтәрмәйенсә тороп, тормошобоҙҙоң алға китеше хаҡында һүҙ йөрөтөү мөмкин түгел. Икенсенән, ауылдарҙың бөтөүе менән дә бер нисек тә килешеп булмай. Өсөнсөнән, балалар юҡ, тип мәктәптәрҙе ябыу башҡа һыймаған хәл. Ата-әсәләр ауыр тойғо, борсолоу менән беренсе синыфта уҡыған балаһын тиҫтәләрсә саҡрым арала ятҡан ауылға уҡырға йөрөтөргә мәжбүр. Юрамал эшләнәме был, әллә заманы шулаймы, һис аңлашылмай. Ауылдарҙы йәшәтеү өсөн эш урындары кәрәк икәне бәхәсһеҙ, ә бының өсөн коллектив хужалыҡтарҙы тергеҙеү кәрәк. Шунһыҙ, ауыл хужалығын нисек күтәрмәк кәрәк? Ауыл хужалығын бөлдөрҙөк тә, сит ил аҙыҡ-түлегенә көнөбөҙ ҡалды. Хәҙер магазиндарҙағы тауарҙың 80 проценты ситтән килтерелгән. Ҡара тупрағы булмаған Мысыр, Израилдең картуфын ашайбыҙ.

Ҡалаларҙа ла сәнәғәт предприятиелары эшләүҙән туҡтаны. Офшор фирмалар барлыҡҡа килде. Был бит илде асыҡтан-асыҡ талау, үҙ халҡыңды хөрмәт итмәүҙың асыҡ миҫалы. Ошо хәлдәргә юл ҡуйыусылар илһөйәрлек хаҡында һөйләй аламы? Украиналағы ғына түгел, элекке союздаш республикаларҙа булған низағтар нигеҙендә лә социаль мәсьәләләр һуңғы роль уйнамағандыр. Беҙ хәлдәрҙең киҫкенләшеп китеүен теләмәҫ инек.

## "Тарих - кейем түгел, иҫкеһен яңыһына алыштырырға"

*(№19, 2008 йыл)*

***Азат МАҒАЗОВ (1926-2015), Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, яҙыусы:*** Мин һуғыш дәүерен ошо ваҡыттың ябай бер кешеһе булараҡ хәтерләйем. Һуғыш башланыу менән беҙҙең тормош-көнкүрешебеҙ ҙә тамырынан үҙгәрҙе. Ошо үҙгәрештәр хәтергә юйылмаҫлыҡ булып яҙылып ҡалған да инде. 1940-1941 йылда һигеҙенсе класта 35 бала уҡыһа, һуғыштың тәүге йылында 15-17 бала ҡалды. Атайым уҡытыусы ине, уны хеҙмәт армияһына алдылар. Әсәйемдең ҡарамағында ете бала тороп ҡалды. Үҫмер малайҙарҙың теләк-хыялдары бер ине: беҙ һуғышҡа барһаҡ, дошманды мотлаҡ еңәсәкбеҙ, һәм һуғыш та бөтәсәк. Һуғыштан яраланып ҡайтҡан ағай беҙҙе мылтыҡтан атырға, граната ташларға, дөрөҫ итеп шыуышырға өйрәтеп, һуғышҡа тәүге әҙерлек алып барҙы. Беҙ бик тырыша инек, һәм һуғышҡа барыуҙан ҡурҡыу тойғоһо булманы. Беҙ - Дим буйы егеттәре, күрәһең, нәҫелдән-нәҫелгә күсә килгән яугирлыҡ рухы беҙгә лә бирелгән булғандыр.

1943 йылда мәктәпте тамамлағас, 1926 йылда тыуған егеттәр военкоматҡа саҡырылды. Беҙҙең һымаҡ йәш егеттәрҙе әҙерлекһеҙ көйө фронтҡа ебәрмәйҙәр ине инде, хәрби етәкселәрҙең уйлап эш итеүҙәренән дә шулай булғандыр. Беҙҙе, Башҡортостандан йөҙләп егетте, 1943 йылдың 7 ноябрендә Орскиға кесе авиация техниктары мәктәбенә алып киттеләр. Унда авиация техникаһы, радиотехника буйынса 6 ай буйына уҡыттылар. 1944 йылдың йәйендә беҙ хәрәкәт итеүсе армияға, 947-се Ставрополь авиация штурмлау полкына килдек. Минең һуғыш юлым шунда башланды.

Һуғыш шарттарында һәр бер хәрби подразделение, часть армияның берҙәм организмына әйләнергә тейеш ине. Ә бының өсөн һалдат дисциплинаһы, үҙ бурысыңды намыҫ менән үтәү һәм, әлбиттә, һуғышсан рух кәрәк. Беҙҙең халҡыбыҙға ватансыллыҡ, рух ныҡлығы ата-бабаларыбыҙҙан бирелгән. Башҡортостан егеттәре һуғышта ла, унан һуң да һынатманы. Германияла Һауа армияһы инспекторы булып йөрөгәндә командирҙар әйтә ине: "Шоферың Башҡортостандан булһа, бер ҡайғың булмаҫ. Ул шундай намыҫлы хеҙмәт итә, хатта иң ышаныслы дуҫыңа әйләнә".

Беҙҙе ата-әсәләребеҙ, уҡытыусылар, пионер, комсомол ойошмалары патриот итеп тәрбиәләне. Әсәйем мулла ҡыҙы булып, атайым революцияға тиклем муллалыҡҡа уҡыуына ҡарамаҫтан, икеһе лә Совет власына тоғро булды. Ил берҙәмлеге булмаһа, дошманды еңә алмаҫ инек. Һалдат дуҫлығы көслө ине. Балтика буйын азат итеү өсөн барған хәрби операция ваҡытында булған бер ваҡиғаны иҫкә алыу урынлы булыр. Летчиктар, эскадрилья командиры капитан Картавенко һәм кесе лейтенант Холодов, дошман автоколоннаһына яһаған уңышлы атаканан һуң үҙ базаларына ҡайтырға сыға. Фронт һыҙығына етә килә, дошман зениткалары утына эләгеп, Картавенко яралана, самолетының моторы зарарлана. Командир, самолетын көс-хәл менән фронт һыҙығы аша үткәреп, бер яланға килеп төшә. Холодов та үҙ самолетын Картавенконыҡы янына ултыртып, уның яраларын бәйләп, уҡсы-радисын командир самоле-

✓ ***Иртәгә ҡайтырға юлға сығам тиеп йөрөгәндә уны урманда ҡасып йөрөгән дошман ҡалдыҡтары үлтереп китә. Был 1946 йылдың 18 майы була. Ә биш көндән һуң мин донъяға килгәнмен.***




# ОНОТОЛМАҺЫН!

тын һаҡларға ҡалдырып, тиҙ генә яҡындағы аэродромға йүнәлә. Фронтта бындай хәлдәр бер генә булманы. Үҙең үлһәң үл, әммә иптәшеңде ҡотҡар - был совет һалдатына хас иң юғары әхлаҡлылыҡ принцибы ине.

## "Һеҙҙең ғаиләлә Бөйөк Ватан һуғышы тураһында ниндәй хәтирә һаҡлана?"

*(№19, 1014 йыл)*

***Таңсулпан ҒАРИПОВА, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы:*** Атайым - Мөхәмәтколов Хизбулла Ғибәҙулла улы - һуғыш башланғанға тиклем армия сафында Төркөстан фронтына эләгә һәм унда атлы ғәскәрҙә һуғыш буйынса ҙур тәжрибә туплай. Унан ҡайтҡас, ауыл малайҙарын да ат менән эш итергә өйрәтә, уларға "джигитовка", йәғни атта оҫта йөрөү, ат менеп һуғышыу дәрестәре үткәрә. Шуға күрә һуғыштың икенсе көнөндә үк ғариза яҙып, үҙе теләп фронтҡа киткән атайымдың Башҡорт кавалерия дивизияһы сафтарында һуғышыуы бәхәсһеҙ була. Ошо дивизия составында Берлинғаса яу юлы үтә ул. Дәһшәтле ҡан ҡойоштарҙың уртаһында булырға тура килә уға. Днепрҙы кискән саҡта ҡаты яраланған атайыма, ауылына ҡайтып, бер аҙ хәл йыйыу өсөн ял бирәләр. Сталинград өсөн барған ҡаты һуғыштар ваҡытында атайым "Хоҙайым, ошо мәхшәрҙән иҫән-һау ҡотолоп, тағы ла 9 ғына йыл йәшәһәм, һис үкенмәҫ инем" тип, үҙенә ғүмер һорай. Хоҙай ишеткәндер, атайым 1945 йылдың 29 августында имен-аман тыуған ауылына, ғаиләһе янына әйләнеп ҡайта. Ҡайтҡас та ауылды тергеҙеүгә, колхозды күтәреүгә бар көсөн һала. Әсәйем менән бергә ҡарауһыҙ, етем ҡалған әбейҙәрҙе өйөбөҙгә алып ҡайтып көтәләр. Хоҙай уға, үҙе һорағанса, теүәл 9 йыл ғүмер бирә. Колхоздың бүрәнәнән эшләнгән беренсе һыйыр аҙбарын төҙөү өсөн ағас әҙерләргә барғанда, ике иптәшен ҡотҡарам тип, иптәштәренең өҫтөнә төшөп барған бүрәнәне алып ташлағанда имгәнеп, 45 йәшендә һәләк була. Атайым үлгәндә миңә 6 йәш кенә булып ҡала. Мине гел генә - баҫыуға сыҡһа ла, урманға барһа ла, эшенә йөрөгәндә лә - арбаһына ултыртып, үҙе менән алып йөрөнө ул. Ул үлгәс, ауылдаштарым мине "Хизбулланың ҡыҙыл башлы ҡомартҡыһы", тип йөрөттө. Атайым моңло итеп йырлай торғайны. Уның башҡарыуындағы башҡорт халыҡ йырҙарын барыһы ла яратып тыңлар ине. Кәрим Дияров, Ғата Сөләймәнов кеүек ҡурайсылар күп йырҙарҙың һүҙҙәрен, тарихын атайымдан яҙып алды. Беҙҙең ғаилә өсөн иң ҙур байрам - 9 Май байрамы, Еңеү көнө. Уны һәр ваҡыт көтөп алабыҙ, билдәләйбеҙ, атайымды, уның һуғыштан ҡайтмаған ҡустыларын иҫләйбеҙ.

***Рәйлә ФӘСХЕТДИНОВА, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы генераль директоры:*** Атайымды 1941 йылда 25 йәшендә һуғышҡа алып китәләр һәм ул һуғыш бөткәнсе, илбаҫарҙарға ҡаршы көрәшә. Еңеүҙе яу яланында ҡаршылаған атайыма, башҡа совет һалдаттары кеүек үк, тиҙ генә тыныс тормошҡа аяҡ баҫырға насип булмай. Һуғыш тамамланғас та, оккупанттарҙың ҡалдыҡ ғәскәрҙәрен илдән ҡыуып сығарыу өсөн улар һаман сафта ҡала. Шулай ҙа 1945 йылдың августында атайыма - Фәйзуллин Ғариф Шәңгәрәй улына - бер айға ғына булһа ла Башҡортостанға, тыуған йортона ҡайтып килеү мөмкинлеге тейә. Ошо ҡайтыуында ул миңә ғүмер бүләк итеп китә. Калинин өлкәһендә хеҙмәтен дауам иткән атайым донъяға тағы бер балаһы тыуасағын белеп, ныҡ шатлана. Малай булһа - Рәил, ҡыҙ булһа - Рәйлә исемен бирербеҙ, тип яҙған хаттары ғаиләбеҙҙә изге ҡомартҡы булып һаҡлана. Ләкин уға ҡыҙын, йәғни мине, ҡулдарына алып һөйөү бәхете теймәй, иртәгә ҡайтырға юлға сығам тиеп йөрөгәндә уны урманда ҡасып йөрөгән дошман ҡалдыҡтары үлтереп китә. Был 1946 йылдың 18 майы була. Ә биш көндән һуң мин донъяға килгәнмен. Шулай итеп, атайым - мине, мин - атайымды күрмәнем. Атайым, улым тыуыр, тип ышанғандыр инде, малайҙар күлдәге тектереп, йүргәктәр һалып, посылка ебәргән булған...

Атайымдың үлеме тураһындағы хәбәр оҙаҡлаған. Ана ҡайта, бына ҡайта тип көтөп йөрөгән әсәйем Ғарифының вафат булыуын һуңлап ҡына белгән. Үле хәбәре килгәс тә, бер нисә йыл "ҡайтыр", тип өмөтләнеп көткән. Балаларын бергә тәрбиәләй алмауҙарын, Ғарифының яңы тыуған Рәйләһен күрмәй үлеп китеүен уйлап, сеңләп илауы әле булһа ҡолағымда сыңлап торған кеүек. "Бигерәк һәйбәт кеше ине атайығыҙ. Мине алтынға урап, көмөшкә көпләп ҡуйҙы бит ул", тип ҡабатлар булды. Атайымдың иркәләүен тоймай үҫеүем ғүмерлек үкенесем булып йәшәй күңелдә.

## "Өсмөйөшлө хаттарҙа еңеүселәр һүҙе"

*(№19, 2008 йыл)*

***Фәрит ВӘХИТОВ, журналист:*** Мин 1941 йылда 1-се класҡа барған малай. Башта атайым, унан 16 йәшлек ағайым Миңлеәхмәт һуғышҡа китте. Улар беҙгә хат яҙа, беҙ Әминә апайым менән уларға яуап яҙабыҙ. Шулай хаттар яҙыштыҡ. Атайым һуғыштан иҫән ҡайтты, ә бына ағайым 1945 йылдың башында Словакияла ятып ҡалды. Ана шул атайым менән ағайымдың хаттарын һуғыштан һуң да уҡып йәшәнек. Күп балалы ғаиләлә ас-яланғас булып, күңелдәрҙе һағыш биләп алған мәлдәрҙә ошо хаттарҙы уҡып, йыуаныс таба инек. Ысынлап та, хат яҙған йәки уны уҡыған ваҡытта һағыныу хисен бер сама баҫып була, туғанлыҡ, дуҫлыҡ ептәрен яңыртып, нығытып була.

Бөйөк Ватан һуғышы бөткәс, мин малай аҡылым менән: "Был сама ҡәһәрле әшәке дошманды еңгәс, Советтар иле мәңге йәшәйәсәк һәм, ғөмүмән, Ер шарында бер ваҡытта ла һуғыш булмаясаҡ", - тип уйлай инем. Ни эшләп һуғыш булырға тейеш? Беҙ бит иң яуыз дошманды еңдек!

Һуғыштан һуң Совет власы үҙ яугирҙарын онотто. Яу яланында ятып ҡалғандар тураһында, әйтәйек, беҙ ғаиләлә иҫкә алһаҡ - алабыҙ, ә хөкүмәт тарафынан бер ниндәй ҙә иғтибар булманы. Уларҙы хәтергә алыу, исемлектәр төҙөү кеүек эштәр бөтөнләй башҡарылманы. Хатта Еңеү байрамы ла булманы бит. Ил күләмендә Бөйөк Еңеүҙе байрам итеү 1965 йылдан ғына башланды.

Шул ваҡытта башыма фронт хаттарын йыйыу тураһында уй килде һәм мин был ниәтемде тормошҡа ашыра башланым. Архивтарҙа, редакцияларҙа, әлбиттә, хаттар бар ине, ләкин уларға тотонманым, мин башҡа юл менән эш итергә булдым. Уның үҙенсәлеге аңлар өсөн ауылдан - ҡалаға, ҡаланан билдәһеҙ тарафтарға китеп, халыҡтан-халыҡҡа йөрөп йыйҙым ул өсмөйөшлө хаттарҙы. Ике телдә "Аҡ аманат һалдат хаттары" - "Письма огненных лет" тигән китап булып сыҡты был эштәрем. Әле лә йыям хаттарҙы. Был хаттарҙы уҡыған саҡта шуны шәйләнем: ябай һалдат яҙмаларында Еңеү идеяһы ярылып ята. "Беҙ еңәсәкбеҙ!", "Дошман тар-мар ителәсәк!" тигән фекер-маҡсат, оло теләк һәр хатта тиерлек сағыла. Уларҙы йәш быуынға уҡытыуҙың тәрбиәүи әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Атай-олатайҙарҙың Еңеү идеяһы уландар күңеленә лә күсергә тейеш.

## "Яугир атайҙарыбыҙҙың һуғыш хәтирәләрен күңелдә һаҡлайбыҙ"

*(№18, 2019 йыл):*

***Һәйүклә ИБРАҺИМОВА, яҙыусы Ғәли Ибраһимовтың ҡыҙы:*** Атайыбыҙ тере саҡта 9 Май көндә баҡсала табын ойоштора ине. Уның янына мотлаҡ көләмдәш ветеран дуҫтары килә. Беҙ хәҙер ҙә, атайыбыҙ юҡта ла, шул уҡ баҡсала байрам табынына йыйылышабыҙ. Сөнки беҙ бит фронтовик балалары - фронтовик ҡыҙҙары. Атайым 1939 йылда хәрби хеҙмәткә алына. Хабаровск өлкәһенә эләгә. 1943 йылға тиклем уларҙы япон сигендә резервта тоталар. Унан Курск дуғаһына күсерәләр. Ул шунда һуғыш үткән ерҙәрҙең нисек бушлыҡҡа әйләнеп ҡалыуын күреп аптырай. Беренсе Украина фронтында һуғыша, Польша, Украина, Белоруссия аша үтеп, Одер эргәһендә ҡаты яраланып, госпиталгә эләгә. Дауаланып сыҡҡанда инде Еңеү иғлан ителә. Ләкин ҡапыл ғына ҡайта алмай әле, атайымды Венгрияға ебәрәләр. Еңеүҙән һуң беҙҙең армия сит илдәрҙән төрлө предприятиеларҙы, сәнәғәт, ауыл хужалығы ҡорамалдарын күсереп алып ҡайта. Атайымдар Венгриянан Карпат тауҙары аша мал ҡыуып алып килеп, Украинаға тапшыра.

Һуғыш тамамланғас, Ишембайға ҡайтып, нефть техникумында инглиз теленән уҡыта, аҙаҡ "Совет Башҡортостаны" гәзитендә хәбәрсе, әҙәби хеҙмәткәр, бүлек мөдире, яуаплы секретарь вазифаларын үтәй. Шул уҡ йылдарҙа ситтән тороп Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай. Һуңыраҡ Мәскәүҙә СССР Яҙыусылар союзының Юғары әҙәби курсында уҡый. 1959 йылдан алып "Ағиҙел" журналының яуаплы секретаре булып эшләй. 1956 йылда "Бер полк кешеләре" тигән романы баҫылып сыҡҡас, атайымдың "яҙыусы" икәнлеген дә аңлап алдым. Үҫә бара атайымдан һуғыш тураһында ҡыҙыҡһынып һораша башланыҡ. "Нисә немецте үлтерҙең?" тигән һорауҙы бирә бит инде балалар иң беренсе. Ә атайыбыҙ бик баҫалҡы кеше ине. "Әлләә, кем уны һанаған? Ҡул һуғышында, бәлки, өсәү-дүртәү булғандыр", - ти. "Аҙ бит, нишләп күберәк үлтермәнең?" - тибеҙ балалығыбыҙға барып.

Олоғая бара атайым да арыуыҡ ҡына иҫтәлектәр һөйләп ҡалдырҙы, мин уларҙы яҙып, төрлө баҫмаларҙа баҫтырҙым. Мәҫәлән, атайымды ҡотҡарған ҡайсы тураһында ҡыҙыҡ ҡына бер хәтирә бар. Түш кеҫәһендә бәләкәй ҡул ҡайсыһы йөрөткән ул. Бер бәрелештән һуң ул ҡаты яралана, ә санитарҙарҙың уға килеп етергә ваҡыты юҡ. Хәле бөткәндән бөтә барып, ағас төбөндә ята. Шул мәл бер санитар "Кемдә ҡайсы бар?" тип марля ҡырҡырға ҡайсы эҙләй һәм атайым уға саҡ ҡалҡынып, "Миндә" тип өндәшә. Ҡайсы артынан килгән санитар уның хәлен аңғарып, арбаға тейәп алып китә. Унан теге медсестра уға ҡайсыһын кире бирә. Атайым ҡайсыһын һуғыштан алып ҡайта, һеңлеһенә бирә. Ул үлгәс, һеңлеһе ҡайсыны миңә тапшырҙы, ә мин уны Әҙәби музейға илтеп ҡуйҙым. Уның урыны шунда.



Ноғман МУСИН

# Атайымдың ос һәнәге

Хикәйә

Әсәйемдең тәфсирләп өйрәтеүенә көләмһерәй биреп ҡарап торам. Һәй, эшме ни инде шул бесән әйләндереү, тип уйлайым күңелемдән. Аңламаслыҡ нимәһе бар?

Тирә-яғыма күҙ һалам: яланға, әйтерһең, ҡаймалап һырылған ҙур балаҫ түшәп ҡуйғандар. Хатта ошо бакуйҙарҙы йыйып алһаң, әле һырланып-тулҡынланып ятҡан сабынлыҡтың йәме китер ҙә ҡуйыр төҫлө. Күңелде ҡытыҡлап, танауға әскелтем бесән еҫе килеп бәрелә, күңелгә рәхәт булып ҡала. Мин дәртләнеп эшкә тотонам. Ләкин бакуй аҫтына тыҡҡан һәнәгемдең осо ергә ҡаҙала. Иплəберәк янынан ҡабатлайым, һәнәк осо йәнә тупраҡҡа төртөлә. Асыуланып, һәнәгемде көс менән өҫкә күтәргәйнем, бер яҡҡа туҙышып бесән ырғыны, һәнәк осона йәбешкән тупраҡ күҙемә һирпелде.

- Өтәләнмә, улым, - ти әсәйем, - ашыҡҡан эш бөтөрмәҫ, таһыллы эш бөтөрөр, тигән боронғолар.

Тупраҡ күҙҙе өйкәй, ләкин уны ең осо менән генә тызып алам да, әсәй алдында һыр бирмәү өсөн (һәнәк йәбен һындырып көлкөгә ҡалған да еткән), тағы эшкә тотонам. Әһә, был юлы ыңғай уҡ әйләндереп һалдым бит бакуйҙы. Тик икенсе тапҡырында һәнәк тағы тупраҡҡа ҡаҙалды. Был ни иткән эш әле?

- Улым, һәнәгеңдең йәбе ҡалтайып торған яғын өҫкә әйләндереп тот, шунан төртөлмәҫ.

Эй, ошо әсәйемде, һаман тикшереп тора, имеш. Уның туҡтауһыҙ өйрәтеүе сей елкәмә тейһә лә, һәнәкте әйләндереп тотам. Бәй, эш көйләнде лә китте бит. Һәнәгемде бакуй аҫтына тығам да әйләндерәм, тығам да әйләндерәм, һәнәк осо ҡаҙалып та ҡарамай. Әсәйем:

- Вәт шулай, - тип эшемде ҡеүәтләне лә кипкән бакуйҙарҙы йыйырға тотондо. Яландағы тынлыҡты бесән шаптырҙауы боҙҙо. Мин урман ҡырындағы бакуй баштарын бил яҙмай әйләндерәм дә әйләндерәм. Бер аҙҙан артыма әйләнеп ҡарайым - апаруҡ ыратып алып барам бит. Өҫтәүенә, шул саҡ әсәйем:

- Өтөп алып бара лабаһа минең улым, - тип ебәрҙе.

Тағы ла дәртләнеберәк дауам иттем. Әллә көн эҫей төштө, битемдән субырлап тир аға, ул әсеттереп күҙгә төшә, хатта ауыҙға ла килеп инә. Лысма һыу булып арҡама йәбешкән күлдәгемде һалып ырғыттым. Ләкин күгәүендәр тешләй башлағас, уны яңынан кейергә мәжбүр булдым. Тирләп-бешеп тағы бер аҙ эшләгәс, һәнәгем баяғы кеүек йәнә ергә ҡаҙала, эшем ыңғай бармай башланы. Һәнәгемде тегеләй-былай әйләндереп ҡарайым, юҡ бит, тупраҡҡа төртөлә лә бакуйҙы әйләндереп булмай ҙа ҡуя. Бөтә бәлә һәнәктә һымаҡ күренә миңә, уны тегеләй-былай әйләндергеләп ҡарап торам.

- Улым, аҙыраҡ ял ит. Ана, анауындағы күләгәгә барып ултырып тор.

Гел минең ни эшләгәнемде ҡарап ҡына йөрөймө икән ни был әсәйем? Үҙемдән ситтә йөрөһә лә, бөтәһен дә күрәсе. Уның әйткәнен тыңламай, сәмләнеп, тағы эшкә тотондом.

Ике-өс бакуй башын әйләндереүем булды, һәнәк осо йәнә ергә ҡаҙала. Ул арала эргәмә әсәйем килеп етте.

- Бөтөнләй эшкиндең бит, улым, - тип ул мине ҡосаҡлап ала ла ярҡамдан һөйә. - Һай, улым, ҡайһылай тирләгәнһең. Әйҙә, күләгәгә ултырып, бәләкәс кенә ял итәйек. Эш ҡасмаҫ ул.

Еңем менән тиремде һөртә-һөртә әсәйем артынан атланым. Ялан ситендәге төптән үк ботаҡлы ҡарағай төбөнә барып ултырҙыҡ. Ултырҙыҡ тип, әсәйем ултырҙы, мин үлән өҫтөнә һуҙылып яттым. Бер ниндәй елфәлән дә, шылт иткән тауыш та юҡ. Шар аяҙ күк шул тиклем бейек, ә икенсе ҡараһаң, ул шыййығылһа ла, үҙ һүҙендә торор ине. Әй шул көндө ярһып эшләүе! Мин кәбән башында торам, уның ырғытҡан бесәнен тапап өлгөрә алмайым хатта. Оҫта һала торғайны ул кәбәнде. Бесәнде күбәнән кәле-кәле менән генә алып, кәрәкле генә урындарға ырғытып тик йөрөй. Ул көндө кәбәнен ослағансы саҡ ҡына ла туҡтап торманы ул. Аҙаҡҡы һәнәк бесәнде ырғытты ла: "Яулығыңды сис тә һайғау осона бәйлә!" - тип ҡысҡыра. Яулығымды һайғауға бәйләгәс, һорай был: "Тегеләрҙе ҡара әле, бөтәләрме?" - ти. Миңә ни кәбән башынан Йәноҙаҡ бабайҙарҙың сабыны ус төбөндәге кеүек күренеп тора. Улар кәбәнен саҡ яртылаған. Атайың: "Кем менән

Башыма, ҡасан мин дә шулай берәйһе менән ярышып кәбән ҡойормон икән, тигән уй килә. Шунан иртәнсәк Йәноҙаҡ бабай алып киткән ос һәнәге иҫемә төшә. Ул һәнәккә ниңәләр мин үҫеп етеп, кәбән һалырлыҡ булмайынса бер кемдең дә ҡулы теймәҫкә тейештер һымаҡ тойола. Их, ҡасан анау Афзал ағайҙар һымаҡ ҙурайып кителә инде. Ниңә икәнен үҙем дә белмәй, әсәйемдән ҡыҫҡырып һорайым:

- Әсәй, Йәноҙаҡ бабай ос һәнәгеп һындырып ҡуймаҫмы икән?

Әсәйем, аптырағандай, аҙыраҡ һүҙһеҙ ҡарап тора.

- Ниңә улай тиһең? Һындырырға ни, бөгөн башлап кәбән ҡоямы ни ул.

лан оҙон ҡарағайҙарға эләгеп торған кеүек. Шул ҡуйы зәңгәр күккә ҡарап шым ғына ятыуы ҡалай рәхәт. Тәнде мамыҡ өйөмө менән баҫтырып ҡуйғандар төҫлө, бармаҡты ла ҡыбырҙатаһы килмәй.

- Атайың һуғыштан элек бер үҙе ошо сабынды ике көндә сабып бөтә торғайны, - әсәйемдең моңһоу тауышы бик алыҫтан ишетелгән һымаҡ тойола. - Бесән саба белмәгән кешеме ни мин, сабышайым, ярҙам итешәйем, тием. Юҡ бит, үҙем иҫән саҡта һинән ауыр эш эшләтәһем килмәй, ти ҙә ҡуя. Әйтерһең, үҙенең иртә донъя ҡуйырын белгән, мәрхүмең... Эээ-й, атайың иҫән булһа... - Атайым иҫән булһа, ни эшләр ине, әсәйем һүҙен әйтеп бөтмәйенсә туҡтап ҡала, байтаҡ шым ултырғас ҡына шул уҡ моңһоу, һағышлы тауышы менән дауам итә. - Бер йылды шулай Йәноҙаҡ бабайҙар анау Ҡыҙылташ арьяғындағы яланды саптылар, беҙ әлеге ошонда инде. Көндөҙгө сәйҙе йылға буйына төшөп бергә эсә торғайныҡ. Сәй эсеп ултыра торғас, атайың менән Йәноҙаҡ бабайың бәхәсләште лә китте бит. Беҙҙең утыҙ өс күбә бар ине, Йәноҙаҡ бабайындарҙыҡы - егерме бер. Атайың әйтә, барыбер кәбәнде мин һинән алда ҡойоп бөтәм, ти. Беләһең бит, Йәноҙаҡ бабайың да үҙһүҙле. Булмаҫ, минең дә эштән сығып ҡартайып барған ер юҡ әле, ул егерме бер күбәне һин ярты кәбәнеңде ҡойғансы уҡ ырғытып бөтәм мин, тип ал бирмәҫкә тырыша. Берәр һарыҡ тәкәһенән бәхәсләшәте бит былар. Кем элек ҡойоп бөтә - шул кәбән үҙгенә ҡуйылған һайғау башына ҡыҙыл сепрәк бәйләй, тип һүҙ бирештеләр. Сәмле кеше ине атайың, әйттеме, сәсәп

бәхәсләшеп маташа бит әле ҡарт, бер һарыҡ тәкәһен эләктерҙек, бисәкәй", - тип рәхәтләнеп көлгән булды. Үҙе бит әле атты екте лә, Йәноҙаҡ бабайындар яғына сығып, кәбәндәрен ҡойоп бөтөштө. "Ен икәнһең һин, Сәлмән, - ти Йәноҙаҡ бабайың. - Тәкә - һинеке", - ти. Үҙе һаман һыр бирмәҫкә маташа. "Һинең ос һәнәгең шәп шул, Сәлмән ҡустым, шуның менән алдыраһың", - ти. "Һинең был аша атлап сығырлыҡ кәбәнеңә ос һәнәгенең кәрәге лә юҡ инде", - тип көлгәйне атайың, Йәноҙаҡ ҡайнаға үсекте лә китте. Ауылға ҡайтып еткәнсе, бер ауыҙ һүҙ ҡушманы. Атайың эште оҙаҡҡа һуҙырға яратмай ине. Тегеләрҙең тәкәһен шул көндө үк етәкләп алып ҡайтты ла, һуйып, үҙҙәрен бөтә бала-сағаһы менән ҡунаҡҡа саҡырҙы. Тәкәнде йәлләп, һуймай йөрөй инең, бына йәтеш булды лабаһа, тип көлә, етмәһә. Эээ-ййй, бар ине заманалар...

Әсәйемдең һуңғы һүҙҙәре миңә ниңәләр, атайың бына шулай ине, ә һин төш тә етмәҫ борон әлһерәп, кәрһеҙләнеп ятаһың, тигән һымаҡ тойолдо. Сәмләнеп, ырғып торҙом, һәнәгемә тотондом.

- Улым, - тип, китә башлаған еремдән әсәйем туҡтатты,- ашантыны ҡалдырған ерҙән айранды килтер әле, тамағым кибеп тора.

Айран эскәс, уғата хәл инеп киткәндәй булды. Мин үҙ эшемде дауам иттем, әсәйем бесән йыя. Атайым тураһында әле генә ишеткән һүҙҙәр нык тәьҫирләндергәйне мине. Уның сәмләнеп, бесәнде ҡутараһынан сәнсеп, кәбән ҡойоп йөрөгәнен күҙ алдына килтерәм дә, үҙем дә кем менәндер уҙышҡандай, тилбереберәк эшләргә тырышам.

Ҡайтарып һүҙ әйтә алмайым, сөнки һораүҙы ниңә биргәнемде үҙем дә төшөнөп еткермәй инем.

Бүтәне бүтән, иллә-мәгәр төшкә сәй тәмле булды ла һуң. Ғүмерҙә лә ул хәтлем эсмәгәндә, әллә нисәмә сынаяҡ сәй һемерҙем. Әсәйем ашап бөткәнсе тип ятып торғайным, әллә ни арала йоҡлағанмын да киткәнмен. ...Имеш, ҙур бер ялан. Ул иҫәпһеҙ күп күбәләр менән сыбарланған. Малайҙар бер нисә ат менән күбә тарттыра. Мин иһә шул яландың уртаһында тирләп-бешеп кәбән ҡоям. Атайымдың ос һәнәге ҡулымда уйнап ҡына тора. Бесәнде күбәнән ҡутараһынан сәнсәм дә кәбәнгә ырғытам, сәнсәм дә ырғытам. Кәбән башында торған әсәйем мин ырғытҡан бесәнгә күмелеп-күмелеп китә. Ҡабаланма, барыбер Йәноҙаҡ бабайыңдан элек һалып бөтә алмаҫһың, ти. Уның был һүҙҙәре мине тағы ла нығыраҡ сәмләндерә, оторо ярһып китәм, һарыҡ тәкәһе барыбер беҙгә була, тип ҡысҡырам уға. Тир биттән дә, арҡанан да йылға булып аға. Ләкин туҡтау юҡ. Ҡарағайҙан да бейегерәк булып киткән кәбәнгә ос һәнәге менән ырғытып ебәрҙемме, бесән юғарыға үҙе осоп менеп ята - әкиәттәге осар баласмы ни! Бына бер ырғытҡанымда һәнәгемдең һабы ҡулымдан ысҡынып китте лә һәнәк бесәне-ние менән туп-тура һауаға күтәрелде. Эй осоп бара был, эй оса, тора-бара бөтөнләй күҙҙән юғалып булды. "Атайың да, ана шулай осоп китте лә кире әйләнеп ҡайтманы", - ти әсәйем моңһоу ғына...

Атайымдың һәнәген ҡулымдан ысҡындырырға ҡурҡып, уянып китһәм, йән тиргә төшкәнмен, ҡояш хәтәр ҡыҙҙыра. Әсәйем дә эргәлә күренмәй. Сабынлыҡ яғына ҡараһам, ул төшкә тиклем йыйған бесәнен өс күбә итеп күбәләп тә ҡуйған. Шул тиклем оҙаҡ йоҡланыммы икән ни? Әсәйем ниңә уятмаған?

- Кинйәбай, һәнәгеңде алып бында кил, - ти әсәйем. - Минең артта ҡалған ваҡ-төйәк бесәндәрҙе ҡырғыслап йыйып, күбә төбөнә ой.

Ә мин иһә йүнләп атлай ҙа алмайым, баҫҡан һайын һәр һөйәк, һәр быуын ауырта, йөрәккә үтеп инәй. Һылтыҡлап атлап килгәнемде абайлағандыр инде.

- Берәй ерең ауыртамы әллә, улым? - тип һорай әсәйем.

- Юҡ... - Кәүҙәмде тура тотоп, баҙыҡ баҫып атларға тырышам.

Әсәйем миңә әллә йәлләп, әллә күңелемде күтәрер өсөн:

- Бирешмә, улым, - ти, - йәш һөйәк ана шулай итеп сыныға ул.

Өндәшмәнем, ваҡ бесәнде йыйырға керештем, һәнәк тә ауырая төшкән кеүек, ҡулым да ипкенмәй тора. Бер аҙҙан һуң ғына тәнем яҙыла төшә, күңелем дә күтәрелә. Ҡояш түбәнәйеп, көн һүрәүләнгәнсе, ялан буйынса ун күбә яһап ҡуйылғайны инде. Ҡайтырға йыйынып йөрөгәндә әсәйем:

- Бөгөн байтаҡ эш эшләп ташланыҡ бит әле, улым, - тине. - Яңғыҙым ғына булһам, ул тиклем үк ырата алмаҫ инем.

Минең баш күккә тейгәндәй булды. Хатта арығандарым онотолдо. Әсәйем һәнәктәрҙе бакуй аҫтына йәшерә башлағас:

- Алып ҡайтмайбыҙмы ни? - тип һораным.

Һәнәк күтәреп ауылға ҡайтып инге килә ине минең. Буш ҡул булғас, кешеләр бесән йыйырға барғанымды белмәҫтәр һымаҡ.

- Иртәгә тағы киләбеҙ бит, улым. Ниңә уларҙы күтәреп йөрөргә? Мә, бынау ашанты һалып килтергән тоҡсайҙы тот.

Ул арала беҙҙән арыраҡ бесән эшләүсе кешеләрҙең ҡайтып килгәне күренде. Беҙ ҙә уларға ҡушылып ауыл яғына ыңғайланыҡ.

- Бер үҙең булһаң да, байтаҡ йыйып ташлағанһың әле һин, - ти әсәйемә бер апай.

Әсәйем тамағын ҡыра, уға көләмһерәп ҡарай.

- Ағатаҡ, ниңә бер үҙем булайым мин. Улым менән йыйҙыҡ.

Тағы ҡыуаныс тойғоһо солғап ала мине. Ҡулымдағы тоҡсайҙы нығыраҡ һелкеп, эрерәк аҙымлап атлайым.

- Сәлмән мәрхүмгә оҡшаһа, эшкә тилбер булыр, - ти әлеге апайҙың ире, миңә күҙ ташлап.

Ҡайҙа инде миңә атайыма оҡшарға. Ул бит ана ниндәй ҙур, көслө булған. Кәбәнде лә бөтә кешенән шәп һалған. Ә мин... сабынлыҡҡа барып етмәҫ элек үк һәнәгемде һындырҙым, төш ваҡытында йоҡлап ятып ҡалғанмын...

Ҡасан ҙурайырмын да, ос һәнәген бер кемгә бирмәй, үҙем кәбән һала башлармын. Ҡапыл эсем боша, күңелһеҙләнәм. Тирләгән арҡама киске һалҡын ел килеп бәрелә. Ытырғанып, яурындарымды бөрөштөрәм.

**(Дауамы. Башы 15-се һанда).**

ХӘТЕРКИТАП

# БҮТӘН ҺУҒЫШ БУЛМАҪ, ТИП УЙЛАҒАЙНЫМ...

**Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Гитлер фашистарын еңеүҙә әҙәбиәттең роле баһалап бөткөһөҙ ҙур була. Нәфис һүҙ халыкта тыуған илгә тәрән һөйөү, яуыз дошманға көйҙөргөс нәфрәт тойғоһон көслөрәк итеп тоҡандыра, халыҡҡа рухи көс бирә. Был йәһәттән башҡорт әҙиптәренең ижады айырым урын биләп тора, сөнки һәр һүҙ улар күңеле аша ихлас урғылып сыға. Улай ғына түгел, байтағы ҡулына ҡорал ала, алғы һыҙыҡта тиңһеҙ алышта һәләк була. Хатта фронтҡа китә алмағандары ла, асылда, көрәштән туктамай. Рәшит Ниғмәтиҙең тиңһеҙ алыштың тәүге көндәрендә үк яҙылған "Тыуған илем өсөн!", "Үс ал, патриот!", Баязит Бикбайҙың "Ҡоралға, иптәштәр!" шиғырҙары бик күптәргә ышаныс, көс бирә.**



Хәй Мөхәмәтйәров Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән үҙе теләп фронтҡа китә һәм 1941 йылдың декабрендә Көньяҡ фронтта батырҙарса һәләк була. Сәғит Мифтахов шулай уҡ Ватан һуғышының тәүге көнөндә үк үҙе теләп һуғышҡа китә һәм 1942 йылдың февраль айында батальон комиссары С. Мифтаховтың һәләк булыуы тураһында хәбәр килә.

Али Карнай, Хөсәйен Ҡунаҡбай, Мәлих Харис, Мансур Абдуллин, Низам Ҡәрипов, Бәҙрүш Моҡамай һәм башҡа бик күптәр яу яланында ятып ҡалалар. Али Карнай Бөйөк Ватан һуғышында "Башҡорт атлылары" гәзитенең яуаплы мөхәррире була. Мостай Кәрим, Ғәйнан Әмири, Хәниф Кәрим, Әкрәм Вәли, Яҡуп Ҡолмой, Ғаян Лоҡманов һ.б. яҙыусылар дүрт йыл буйына яу эсендә йөрөй. Артабан ҡатмарлы яҙмыштарҙы тасуирлаған йөкмәткеле романдар, повестар, спектаклдәр тыуа. Ибраһим Абдуллин, Ибраһим Ғиззәтуллин, Нәжип Асанбаевтың һуғыш тематикаһына арналған әҫәрҙәрендә нисәмә быуын тәрбиәләнә.

Эйе, һәр замандың үҙ талабы. Күләмле сәсмә әҫәрҙәр һуңғараҡ яҙыла, әлбиттә. Ә һуғыш йылдарында хат өлгөләре ижадта ҙур үҫеш ала. Улар араһында әсәнең яуға оҙатҡан улына биргән алғышы, туғандарының фронтҡа яҙған хаты рәүешендә бирелгәндәре күберәк осрай. Мәҫәлән, Мостай Кәримдең "Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!", Рәшит Ниғмәтиҙең "Әсә һүҙе" шиғырҙары йөрәккә үтерлек итеп ошо формала яҙылған.

Мәлих Харистың фронт лирикаһында батыр һалдат образы үҙәктә тора. "Батыр тураһында баллада", "Хат", "Онотмаһын мине Тыуған ил" тигән әҫәрҙәре Тыуған иле өсөн ғүмерен биргән батырҙың үлемһеҙлеген данлай. Беҙ ҙә тап ошо шиғырҙарҙы ятлап үҫкән быуын.

Дүрт йыл эсендә шағирҙар утыҙға яҡын поэма һәм баллада ижад иткән. Шул эпик әҫәрҙәрҙән Р.Ниғмәтиҙең "Герой тураһында поэма", "Үлтер, улым, фашисты!", "Һинең кәләшеңдең хаттары", Мостай Кәримдең "Декабрь йыры", "Үлмәҫбай" поэмалары, Мәлих Харистың "Батыр тураһында баллада" кеүек әҫәрҙәре иң популярҙар иҫәбендә була.

Йәнә шуны ла өҫтәргә кәрәк: һуғыш йылдарында Башҡорт академия драма театры, Рус драма театры, Опера һәм балет театры, Башҡорт филармонияһы, урындағы театрҙар, шулай уҡ беҙҙең республикаға эвакуацияланған Воронеж драма театры (Стәрлетамаҡ), Киев драма театры (Өфө), Мелитополь украин музыка драма театры (Мәләүез районы Мәләүез ҡасабаһы), Петрозаводск драма театры (Бөрө), Николаев ҡурсаҡ театры (Дәүләкән) коллективтары артистары районлар буйлап гастролдәрҙә була; республика артистарының фронт бригадалары хәрәкәттәге армия яугирҙары алдында сығыш яһай. Һәм улар башҡорт яҙыусыларының шиғырҙарын уҡыйҙар, улар һүҙҙәренә яҙған йырҙарҙы башҡаралар, драма әҫәрҙәрен ҡуялар.

Ибраһим Абдуллиндың "Хуш, Рим", "Тол ҡатындар иламай", "Ҡош юлынан барам" романдары, повестары, Әнүәр Бикчәнтәевтың "Бөркөт һауала үлә", "Ҙур оркестр" повестары, "Ҡарасәй юлы", "Ожмах ҡапҡаһы" романдары бик күп телдәргә тәржемә ителде. Һуғыш йылдарындағы рухлы, илһөйәр тематика артабан да үҙ позицияһын бирмәне. Һәм был әҫәрҙәр башҡорт әҙәбиәтен яңы бейеклеккә күтәрҙе.

Әхтәм Ихсандың Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙары тураһында 1960 йылда сыҡҡан "Саҡма тояҡ аттарҙа" тигән документаль повесы бөгөнгө көндә лә ижадсылар өсөн ҡулланма булараҡ файҙаланыла.

Әнүәр Бикчәнтәевтың Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан балалар, үҫмерҙәр тураһындағы повестарын беҙ ҡат-ҡат уҡып үҫтек. Артабан һуғыш осоро балалары ошо тематикаға үҙенең өлөшөн индерҙе. Халыҡ шағирҙары Рәми Ғариповтың, Рауил Бикбаевтың, Рафаэль Сафиндың, Әнғәм Атнабаевтың һ.б. шиғырҙарын яттан беләбеҙ. Ҡайһы ғына яҙыусыны, шағирҙы алмайыҡ, һәр береһе шанлы-ҡанлы йылдарҙың биттәрен асып күрһәтә. Илдең хәл иткес мәлдәрендә әҙиптәребеҙ ҡулдарынан ҡәләмде лә, утлы ҡоралды ла ысҡындырмай. Үҙ ватанының илһөйәрҙәре, ҡаһармандары икәнен ошо дәһшәтле йылдарҙа тағы ла бер ҡат раҫлай. Хәҙер фронтовик яҙыусыларыбыҙҙың береһе лә иҫән түгел. Ләкин уларҙың ғүмерҙәре үҙҙәренең ижады булып йәшәй.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең "Бөйөк Еңеү яҙында" тигән яҙмаһында шундай юлдар бар: "Фашизмды тар-мар итеп, донъяға тыныслыҡ яуланыҡ, инде бер ҡасан да ерҙә бүтән һуғыш булмаҫ, тип уйлағайным... Ләкин унда ла, бында ла һаман да утлы нөктәләр тоҡанып тора..." Дәһшәтле һуғыш юлын үтеп, иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан фронтовик әҙиптең йөрәк тауышы булды был.

Ниндәй бай был әҙәбиәт! Ниндәй тормош дөрөҫлөгө ярылып ята! "Тыныслыҡ" тигән һүҙҙең ни тиклем ҡәҙерле һәм бөйөк төшөнсә икәнен бар йөрәктән аңлар өсөн алда телгә алған яҙыусыларыбыҙҙың, яугирҙарыбыҙҙың ижадына тағы ла бер мәртәбә күҙ һалайыҡ. Уларҙы уҡыған саҡта йәшәү һәм тормош һулышын тағы ла нығыраҡ тойорбоҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# КИНОҒА ТӨШӨП ТӘ...

**Аҡса эшләүҙең төрлө юлдары барлығын иҫбат итергә кәрәкмәй. Шулай ҙа ҡайһы берҙә үҙенсәлекле, ике ятып бер төшкә инмәгән алымдар булыуын үҙ миҫалымда һөйләп үткем килә. Төп эшем - водитель булып эшләйем - ижадҡа ҡағылышлы булмаһа ла, күңелем менән һәр саҡ ижад донъяһында йәшәйем, сәнғәткә ғашиҡ кешемен. Баш ҡалалағы бөтә театрҙарҙың даими тамашасыһы, кино сәнғәтен дә яратам, концерт-тамашаларға ла бик теләп йөрөйөм. Ә бынан бер нисә йыл элек үҙем дә ошо сағыу, илерткес ижад донъяһының бер өлөшөнә әйләнергә һәм, иң мөһиме, уны килемле итергә өлгәштем.**



Бөгөн күп мәғлүмәт социаль селтәрҙәр аша килә халыҡҡа. Нәҡ социаль селтәрҙә бирелгән бер иғлан миңә әлеге килемле шөғөлөмә юл асты. Мәскәүҙән килгән ижади төркөм тарихи фильм төшөрөү өсөн күп кешеле сәхнәләрҙә уйнарға төрлө типаждағы кешеләр эҙләй ине. Ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмайынса, ниәтемдең уңышлы булыуына ышанып етмәһәм дә, беркетелгән анкетаны тултырып ебәрҙем. Икенсе көнөнә үк шылтыраттылар бит әй! Шулай уйламағанда-нитмәгәндә Рәсәй каналдарының береһе өсөн төшөрөлгән, билдәле актерҙар йәлеп ителгән сериалда мин дә төшөп, тарихҡа инеп ҡалдым.

Фильм төшөрөү үҙе бер ҡыҙыҡлы эш икән, 30 секундлыҡ бер сәхнә өсөн әллә нисә дубль эшләйҙәр, ижад кешеләренең үҙ-ара аралашыуын күҙәтеү ҙә ҡыҙыҡ, актерҙарҙың да төрлөһө бар, ҡайһылары һин дә мин аралаша, икенселәре трейлерынан үҙ ролен башҡарырға ғына сыға һәм аралашыуҙан ҡаса һәм башҡалар. Ғөмүмән, кино төшөрөү барышының уртаһында ике аҙна ҡайнап, был сәнғәт төрөнөң еңелдән булмағанлығын аңлап (шулай булмай ни, тимер юлы аша һалынған күперҙә 3 сәғәт тапарға тура килде бер сәхнә өсөн), үҙем кеүек үк кино сәнғәтенә бөтөнләй ҡыҫылышы булмаған төрлө һөнәр эйәләре менән танышып, режиссер һәм актерҙарҙан автографтар алып, күңелем булды. Бер һүҙ өндәшмәйенсә, тегеләй-былай йөрөүгә генә ҡайтып ҡалһа ла ролем, арыу ғына арытылды шулай ҙа.

Килем тураһында. Эш сәғәте көнөнә 3 сәғәттән алып 6 сәғәткә тиклем булды. Көнөнә биш сәғәт эшләһәң, 4500 һум түләнеләр, эш хаҡы күләме нисә сәғәт төшөүгә ҡарап йә әҙерәк, йә күберәк булды. Әйткәндәй, ашатыу бушлай. Бына ошондай тәжрибә тупланым мин. Бөгөнгө көндә ижади багажымда өс сериал. Уларҙың һаны тағы ла артыр, тип уйлайым, сөнки Мәскәү ижадсылары белдереүенсә, төбәктәрҙә кино төшөрөү күпкә осһоҙораҡҡа барып баҫа икән улар өсөн, шуға күрә төрлө канал, компаниялар беҙҙең яҡтарҙа йыш була.

Бәлки, минең тәжрибәм кемдәлер ҡыҙыҡһыныу уятыр һәм бер аҙ аҡса эшләргә булышлыҡ итер. Иғландарҙы социаль селтәрҙә ҡарап барырға була, гәҙиттә, төрлө төркөмдәр аша күп иғлан ителә. Киноға төшөп тә аҡса эшләргә була.

**Азат ҒӘЛИМОВ.**

✓ *Һәр егет хеҙмәт итергә тейеш, тип уйлайым. Контракт төҙөймө, бер йылға саҡырылыш буйынса ғына барып ҡайтамы - һәр ваҡыт үҙенең тыуған илен, ата-бабаларының ҡәберҙәрен, яҡындарын һаҡларға әҙерлек үтеү мотлаҡ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАТЫ БУЛМА

■ Кембридж университеты ғалимдары асыҡлауынса, бала тәрбиәләгәндә ҡаты булыу уларҙың сәләмәтлеге өсөн зыянлы. Киләсәктә баланың психик тайпылыштарға дусар булыуы ихтимал. Тикшеренеүҙәрҙә 7 меңдән ашыу ошондай осраҡ өйрәнелгән. 3 йәшкә тиклемге балаларға ҡысҡырыу, физик яза ҡулланыу кеүек ҡаты тәрбиә ысулдарының һөҙөмтәһе булып психик проблемалар тора. 9 йәшкә еткәс, тиҫтерҙәренә ҡарағанда бындай балаларҙа хәүефләнеү тойғоһо арта, улар агрессивҡа әйләнә. Тимәк, өйҙәге эмоциональ климат бала сәләмәтлегенә ныҡ тәьҫир итә.

■ Билдәле булыуынса, COVID-19 менән ауырыу күп кенә неврологик тайпылыштарға килтерә: тәм һәм еҫ һиҙеү юғала, хәтер насарая, "мейе томаны" тигән симптом барлыҡҡа килә. Америка ғалимдары 28 йәшлек ҡатында COVID-19 менән ауырығандан һуң прозопагнозия барлыҡҡа килеү осрағын теркәгән. Ул йөҙҙәрҙе танымай башлаған. Ныҡлы тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, унда мәғлүмәтте эшкәртеүҙә башҡа тайпылыштар булмауы асыҡланған. Шулай ҙа ҡатын машинаһын ҡайҙа ҡалдырыуын, хатта таныш булған урында ла аҙашыуын һөйләгән. Был осраҡ менән ҡыҙыҡһынып, ғалимдар тағы ла һынауҙар үткәргән. Унда ауырыу кисергән 54 кешенең тарихын өйрәнеп, уларҙа ла ошондай оҡшашлыҡтар булыуын билдәләгән. Күптәр йөҙҙәрҙе танымауы, аҙашып йөрөүе хаҡында белдергән. Ғәҙәттә, ошо ике билдәнең бергә осрауы баш мейеһе зарар күргәндә була. Шуға ла реабилитация ваҡытында ошоларҙы иҫәпкә алырға кәрәк.

■ Анемияны билдәләү өсөн ҡан тапшырыу кәрәк. Хәҙер был диагнозды ҡуйыу өсөн смартфон ҡушымтаһы ла етәсәк, тип белдерә ғалимдар. Әлегә ул балалар өсөн тәғәйенләнгән. Бала саҡтағы анемия тиҙ ҡыҙып барыуға, инфекция сирҙәренә бирешеүсәнлеккә генә килтермәй, ул дөйөм физик үсешкә лә зыян итә. Күпселек осраҡта тимер дифициты асыҡланмай ҡала. Ғалимдар уйлап тапҡан аппликация смарфонға ҡуйыла, ул баланың фотоһы аша уға диагноз ҡуя. Аппликация нигеҙендә күҙҙең аҫҡы ҡабағы, күҙҙең ағы һәм ауыҙ ҡыуышлығындағы аҫҡы ирен аҫтындағы лайлалы тиресәгә колориметрик скрининг үткәреү ысулы ята. 4 йәшкә тиклемге 43 баланың фотоһын өйрәнеп, ғалимдар уларға дөрөҫ анализ ҡуя алған. Шул иҫәптән, йәшерен формалағы анемия ла ошо рәүешле диагнозлауға бирелә икән. Киләсәктә был аппликация өй шарттарында анемияны асыҡлау өсөн файҙалы булмаҡсы.

■ Ирҙәрҙең түлһеҙлеге йылдан-йыл арта ғына бара, эксперттар билдәләүенсә, һуңғы тиҫтәлә генә ирҙәрҙең репродуктив сәләмәтлеге 40 процентҡа түбәнәйгән. Бының төп сәбәбе булып тирә-яҡ мөхиттең, туҡланыуҙың, насар ғәҙәттәрҙең кире тәьҫире иҫәпләнә. Әммә ғалимдар тағы бер факторҙы асыҡлаған. Ул ир кешенең һөнәри эшмәкәрлеге менән бәйле. 377 ир-егеттең сәләмәтлеге һәм нимә менән шөғөлләнеүен өйрәнеп, ғалимдар шуны асыҡлаған: кемдең эше физик әүҙемлек менән бәйле, улар офис хеҙмәткәрҙәренә ҡарағанда 45 процентҡа һауыраҡ. Тимәк, тап көс талап ителгән эш ирҙе ир итә. Ошоно иҫәпкә алып, сәләмәтлеген нығытырға теләүселәргә физик йәһәттән әүҙемлекте арттырырға кәңәш ителә.

БАЛАЛАР ҠОРО

# ТЫУҒАН ЕРЕНӘ ХӘҮЕФ КИЛГӘНДӘ...

## ир-егет битараф ҡала алмай!



(Башы 1-се биттә).

**➔ Егеттәр, әйтегеҙ әле, бала саҡта һуғыш уйындары уйнай инегеҙме?**

**Ирхан Хисаметдинов:** Минең бала сағым тыуған Бөрйән районы Нәби ауылында үтте. Ә инде 13 йәшемдә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатына уҡырға күскәс, ундағы уйындар артта ҡалды, индәремә үҙем өсөн ҙур яуаплылыҡ ятты. Мәктәптә уҡығанда хәрби-патриотик айлыҡтар, мәсәлән, "Зарница", "Армияла бер көн" саралары үткәрелә торғайны. Малайҙар менән ағастан үҙебеҙгә пистолеттар, автоматтар яһап алып та - "атыш", ә ҡышҡыһын "Идаралыҡ" уйнай инек. Ғөмүмән, спорт уйындары менән һуғыш уйындары тығыҙ бәйле, тип уйлайым. Сөнки улар күбеһенсә ике командаға бүленеп уйнауҙы күҙ уңында тота, тимәк, ҡаршы командала уйнаусылар "дошман" иҫәпләнә: йә берегеҙ, йә икенсегеҙ еңелә. Бик әһәмиәтле бындай уйындар, егет кешегә кәрәкле сәм, ярыш ҡомарын уяталар, физик яҡтан сынығаһың, сослокто арттыраһың. Шуға гимназияла ла мин волейбол менән шөғөлләнәм.

**Арыҫлан Фәйзуллин:** Беҙ ҙә шулай ағас мылтыҡтар менән уйнап йөрөгәнебеҙ хәтерҙә. Стәрлебаш районы Өмөтбай ауылында 10-15 малай йыйылып, ауыл эргәһендәге ағаслыҡта окоптар ҡаҙып, ағас баштарына үрмәләп, ике яҡ командаға бүленеп, бер-беребеҙгә ҡаршы ҡаты алыштар алып бара торғайныҡ.

**Рамаҙан Ишемғолов:** Ундай уйындар һәр малайҙың бала сағында булғандыр ул. Беҙ, Күгәрсен районы Бикеш ауылы балалары ла уйнаныҡ. Ә хәҙер бында ваҡытыбыҙ бик тығыҙ, уйындар ҡайғыһы юҡ. Уҡыуҙа ла һынатмаҫҡа, спортта ла өлгөр булырға кәрәк, етмәһә, 9-сы класта булғас, Төп дәүләт имтиханына ҡыҙыу әҙерлек бара әле.

**➔ Күп йәштәр компьютер уйындарына мөкиббән киткән бөгөн. Һеҙ ҙә мауығаһығыҙҙыр?**

**Ирхан Хисаметдинов:** Юҡ, мин бөтөнләй бындай уйындарҙы уйнамайым, әммә тиҫтерҙәрем араһында мауығыусылар бар. Һеҙ мине ҡупырая тип уйлап ҡуймағыҙ, мин китап уҡыуҙы өҫтөн ҡуям. Компьютер йә телефондағы уйындар ваҡытты бушҡа уҙғарған кеүек тойола. Уларҙың ниндәйҙер ыңғай йоғонтоһо булыуына ла шигем бар, бәлки, реакцияны яҡшырталыр. Ләкин психиканы, нервыларҙы ҡаҡшаталар. Сөнки енелгәндәр ярһып, ҡысҡырып ебәрәләр бит.

**Булат Алсынбаев:** Беҙҙең Башҡорт кадет корпусында уҡыған егеттәрҙең ваҡыттары бик юҡ ундай уйындарға. Шулай ҙа форсат сыҡҡанда компьютер артында ултырып алырға ҡаршы түгелмен. Унда ысынбарлыҡҡа яҡын итеп эшләнгән уйындар бар, шулары ҡыҙыҡлы.

**Арыҫлан Фәйзуллин:** Ауылға ялға ҡайтҡанда ғына эләгә бындай форсат. Шулай ҙа күптән танкылар уйынын уйнайым, унда минең хәҙер 7 танкым бар. Әммә бер ултырғанда 1 сәғәттән дә артыҡ ваҡытымды сарыф итмәйем, үҙ-үҙемде шундай тәртипкә өйрәткәнмен.

**➔ Һәр егет армияла хеҙмәт итергә хыяллана, тип иҫәпләй инек. Хәҙер ҙә бармы шундай хыял?**

**Арыҫлан Фәйзуллин:** Был хыялды бала саҡтан күңелемдә йөрөтәм һәм һәр егет хеҙмәт итергә тейеш, тип уйлайым. Үҙенең һөнәрен хәрби эш менән бәйләйме, контракт төҙөймө, бер йылға саҡырылыш буйынса ғына барып ҡайтамы - һәр ваҡыт үҙенең тыуған илен, ата-бабаларының ҡәберҙәрен, яҡындарын һаҡларға әҙерлек үтеү мотлаҡ.

**Ирхан Хисаметдинов:** Һәр кем үҙе өсөн хәл итәләр был мәсьәләлә. Әммә беҙҙең ғаиләлә армия тураһында тик ыңғай ҡараш йәшәй, атайым яғынан 5, әсәйем яғынан 4 һалдат тыуған ил адында бурысын үтәгән. Ғаилә альбомдарында һаҡланған фотолар, документтар, иҫтәлектәр бар. Әлбиттә, юғары белем алғандан һуң армияға барырға ниәт итәм, әммә бер йылды бушҡа үткәреү булмаһын, ниндәйҙер файҙалы хәрби белем алып ҡайтырға ине. Тиҫтерҙәрем араһында армияла хеҙмәт итеү бөтәһе өсөн дә мотлаҡ булыуын өнәп етмәүселәр, тыуымыштан һәләтле һәм үҙ теләктәре булғандар ғына барһын, тигән фекерҙә булыусылар ҙа бар.

**➔ Киләсәктә ниндәй һөнәр һайларға уйлайһығыҙ? Хәрби һөнәргә лә урын бармы тормошоғоҙҙа?**

**Булат Алсынбаев:** Әлбиттә, киләсәктә мин Советтар Союзы Геройы А.К. Серов исемендәге Краснодар летчиктарҙың юғары хәрби авиация училищеһына уҡырға инергә, летчик-истребитель булырға теләйем. Был хыял миндә бала саҡта атайым менән һөйләшеүҙәрҙән һуң барлыҡҡа килде, ул да йәш сағында осоусы һөнәрен үҙләштерергә бик теләгән, әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, килеп сыҡмаған. Шуға мин Башҡорт кадет корпусына маҡсатлы рәүештә уҡырға килдем. Ә инде 8-се класта Первушино аэродромына барып, симулятор самолетта осоп ҡарағандан һуң, осоусы булыу теләгем тағы ла нығына төштө.

**Арыҫлан Фәйзуллин:** Армияла сик һаҡсыһы булған атайымдың матур формаһына һоҡланып, өлкәндәрҙең һөйләгәндәрен тыңлап, Бөйөк Ватан һуғышындағы ата-бабаларыбыҙҙың ҡаһарманлыҡтары тураһында кинолар ҡарап үҫкән кеше булараҡ, хәрби һөнәр алыу теләгем бәләкәйҙән бар. Әле 10-сы класта белем алам, киләһе йыл Башҡорт кадет корпусын тамамлағас, Санкт-Петербург-

***✓ Минең бик күп туғандарым, атайым да Һауа-десант ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән, араларында Афған һәм Чечен һуғыштарында ҡатнашҡандар күп. Ҡартатайым Бөйөк Ватан һуғышында илебеҙ именлеген яҡлаған.***

тағы А.Ф. Можайский исемендәге Хәрби-техник академияға юлланырмын, тим. Унда алдынғы информацион технологиялар, ракета-йыһан һағы, осоу аппараттарын төҙөү кеүек өлкәләрҙә инженерҙар әҙерләйҙәр. Кеше үҙенең ҡайҙа барғанлығын белеп, уйлап хәл итергә тейеш һөнәр һайлағанда. Хәрби һөнәр һайлап, ғүмерен бағышлаған кешеләр башҡа урын тапмаған өсөн генә түгел, ә нимәне һаҡларға теләгәнен белгән өсөн эшләй. Хәрбиҙәрҙең тормошо еңел булмауын, хатта тыуған яғыма йыш ҡайтып йөрөй алмаҫымды белһәм дә, рух ныҡлығы һәм нәҡ ҡайҙа барғанымды белеүем ярҙам итәсәк.

**Рамаҙан Ишемғолов:** Минең бик күп туғандарым, атайым да Һауа-десант ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән, араларында Афған һәм Чечен һуғыштарында ҡатнашҡандар күп. Ҡартатайым Бөйөк Ватан һуғышында илебеҙ именлеген яҡлаған. Хатта Петр Беренсе заманында ла яуҙарҙа йөрөп, батшаның үҙенән миҙал алған бабам булған. Уның наградаһы ғаилә архивында һаҡлана. Бына шундай "Ир-егеттең төп бурысы - илен һаҡлау", тигән тәрбиә алып үҫтем мин дә. Башҡорт кадет корпусына ла Һауа-десант ғәскәрҙәренә махсус әҙерлек үтеү мөмкинлеге булған өсөн уҡырға килдем. Киләсәктә һөнәремде тап ошо юҫыҡ менән бәйләмәксемен.

**Ирхан Хисаметдинов:** Беҙ яңыраҡ Әлкә ҡасабаһына хәрби әҙерлек үтергә барҙыҡ. Шуға тиклем хәрби һөнәр алыу тураһында уйлап та биргәнем юҡ ине, хәҙер уйлана төштөм. Бер аҙна эсендә армияға бәйле күп кенә мәғлүмәткә эйә булдым, тактика дәрестәре, беренсе медицина ярҙамы күрһәтергә өйрәттеләр. Беҙгә белемдәрҙе капитан, майор, өлкән лейтенант дәрәжәһендә булған хәрбиҙәр бирҙе. ГТО нормативтарын тапшырыу рәүешендә физик көсөбөҙҙө лә һынанылар. Беҙҙең гимназист егеттәр үҙен яҡшы яҡтан ғына күрһәтте, башҡаларға ҡарағанда йондоҙҙарҙы ла күберәк йыйҙыҡ шикелле. Взводыбыҙ алдынғылар рәтендә булды, мин йүгереү буйынса беренселекте алдым. Гимназияла иртәнге туғыҙынсы яртынан төшкө өскә тиклем, шунан сәғәт дүрттән киске етегә тиклем уҡыу шарттарында шундай уңышлы сығыш яһауыбыҙ хатта аптыратты ла. Ни тиһәң дә, быңдай режим менән спортҡа ваҡыт аҙ ҡала, шуға егеттәр көсһөҙөрәк микән тип уйлағайным. Ауыл егеттәренә бирешмәнек, шулай ҙа уларҙың сыҙамлыраҡ, эшкә өйрәнеп үҫкәндәре күренеп торҙо.

**➔ Бөгөн һеҙҙең ағайҙарығыҙ Украинала махсус хәрби операцияла ҡатнаша. Ошо ваҡиғалар тураһында һеҙ ниндәй фекерҙә?**

**Ирхан Хисаметдинов:** Тарихи яҡтан алғанда ла беҙҙең башҡорт халҡы ил өҫтөнә дошман ябырылғанда бер ваҡытта ла ситтә тороп ҡалмаған. Махсус хәрби операция тураһында төрлө фекерҙәр ишетергә тура килде, әммә ил саҡыра икән, тимәк, шулай кәрәк. Сөнки илде һаҡлау - ул һәр ир-егеттең изге бурысы.

**Арыҫлан Фәйзуллин:** Махсус хәрби операция тураһында беҙ көн дә яңылыҡтар ҡарайбыҙ, Шайморатов генерал миҙалына лайыҡ булыусыларҙы ла беләбеҙ. Мин күрше Йәлембәт ауылына йөрөп уҡыным һәм шунан бер танышым әлеге ваҡытта махсус хәрби операцияла ҡатнаша. Әсәйҙәребеҙҙең бер бөртөктәре булһаҡ та, йәшем еткән булһа, мин дә барыр, ситтә ятып ҡала алмаҫ инем, тип уйлайым. Сөнки ысын ир-егет иленә, тыуған еренә хәүеф килгәндә битараф ҡала алмай.

**Рамаҙан Ишемғолов:** Минең дә ике туған десантник ағайым ҡатнаша ул махсус операцияла. Арыҫлан кеүек үк, мин дә йәшем тулған булһа, барыр инем. Сөнки бурысыбыҙ был. Ата-бабаларыбыҙ электән илебеҙҙе йәндәрен аямай һаҡлаған икән, мин дә быны эшләй алмайыммы ни!

**➔ Ошо көндәрҙә Бөйөк Еңеүең 78 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Һеҙ был һуғыш, унда ҡатнашыусылар тураһында беләһегеҙме?**

**Ирхан Хисаметдинов:** Ҡыҙғаныска күрә, ауылыбыҙҙағы Бөйөк Ватан һуғышының һуңғы ветераны Сабирйән Һатыбалов 2018 йылда баҡыйлыҡҡа күсте. Ул тере саҡта мәктәп уҡыусылары менән йыл әйләнәһенә осрашыуҙарҙа ҡатнаша, ә беҙ уға тимурсылар командаһы менән ярҙамға йөрөй торғайныҡ. Ветеран һуғыш тураһында һирәк һөйләне, бәлки, бала саҡта гел генә уны тыңлап та тормағанбыҙҙыр. Хәҙер үҙе тере саҡта һөйләшеп ҡалмауыма бик үкенәм, сөнки шул йылдарҙағы ваҡиғаларҙы фәһем итеп һөйләрлек кешеләр арабыҙҙа ҡалмай бара. Атайым яғынан ҡартатайым Хәйбулла Хисаметдинов та Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, ул Волгоград яғында атака ваҡытында хәбәрһеҙ юғалған. Ҡыҙғаныска күрә, уның фотоһүрәте лә һаҡланмаған. Әммә былтыр Өфөлә үткән "Үлемһеҙ полк" акцияһына туғандаш икенсе бер олатайымдың фотоһын күтәреп сыҡтым. Беҙҙең уларҙы оноторға хаҡыбыҙ юҡ.

**Арыҫлан Фәйзуллин:** Атайымдан һәм бабайҙарымдан һорашып, бишенсе быуында Фәйзулла тигән олатайым булыуын, ул хәбәрһеҙ юғалыуын беләм. Ә Башҡорт кадет корпусы менән йыл да Ишембай һәм Өфө ҡалаһында Еңеү парадтарында ҡатнашам, унда хор менән йәки марш менән үтәбеҙ. Бөйөк Ватан һуғышы тураһында документаль фильмдар ҡарап, китаптарҙан уҡып, уҡытыусыларҙың һөйләгәндәренән дә төрлө мәғлүмәттәр беләм. Мине иң һоҡландырған кеше - осоусы Алексей Мересьев. Ул ике аяғы ҡырҡылған килеш кире һуғыш яланына ҡайтып, байтаҡ ҡына немец самолеттарын бәреп төшөргән Советтар Союзы Геройы.

**Булат Алсынбаев:** Мин Советтар Союзы Геройҙары Муса Гәрәев һәм Александр Покрышкин кеүек шәхестәргә һоҡланам, уларҙан өлгө алам. Танкист Зиновий Колобановтың ярты рота менән генә 22 немец танкыһын юҡ итеүе тураһында беләм. Бына ниндәй ҡаһарманлыҡтар күрһәткән һәм беҙгә тыныс күк йөҙө бүләк иткән ул быуын кешеләре. Был хаҡта онотторға хаҡыбыҙ юҡ, шуға ла Еңеү парадтарында һәр береһенә ысын күңелдән рәхмәт әйтеп, оло хөрмәтебеҙҙе белдереп, баштарыбыҙҙы ғорур күтәреп маршта уҙабыҙ.

**Рамаҙан Ишемғолов:** Бөйөк Ватан һуғышына ҡағылған тарихты яҡшы беләм, унда беҙҙең 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы хайран ҡалырлыҡ ҡаһарманлыҡтар күрһәткән. Атлылар батыр, ҡурҡыу белмәҫ кешеләр булғандыр, тим. Сөнки ҡылыс менән бөтәһе лә танкыға ҡаршы бара алмай. Шулай кәрәк булғандыр инде, һәр кем үҙ илен нисек тә булһа һаҡларға тырышҡан. Бөгөнгө күҙлектән нисек кенә аяныслы тойолмаһын был хәлдәр, кәрәк булһа, мин дә барыр инем, тип уйлап ҡуям хатта. Бергә уҡыған егеттәр алға ырғыһа, бер нәмә лә эшләмәй, ситтә ҡарап тора алмайым бит инде! Һуғыш йылдары тураһында дәрес үткәндән һуң тағы ла шул хаҡта уйланып йөрөгәйнем: Гитлер һөжүм итмәү тураһында килешеүҙе боҙоп, нисек был аҙымға бара алды икән? Ир-егет бит үҙенең әйткән һүҙенә тоғро булырға тейеш.

**➔ Ир-егеттә илһөйәрлек тойғоһо нисек тәрбиәләнә?**

**Ирхан Хисаметдинов:** Илһөйәрлек тойғоһо ғаиләлә тәрбиәләнергә тейеш. Әлбиттә, һәр бер малай өсөн үҙ атаһының өлгөһө беренсе урында тора, уға ҡарап тиңләшке килә. Шунан инде йәшәгән урыныңды, тыуған илеңде матурлау, ер-һыуыңдың ҡәҙерен белеү - илһөйәрлектең тәүге шарттары. Ниндәй милләттән булыуың, ҡайҙа тыуыуыңа ҡарамаҫтан, насип иткән яҙмышыңды ҡабул итеп, тырышып кеше булырға ынтылырға тейешһеңдер. Рухи яҡтан көслө кеше тормошта һәр саҡ үҙ урынын таба аласаҡ. Ә инде бөгөн ҡайһы берәүҙәрҙең йөҙҙәрен күберәк сит илдәргә бороуы иһә, илһөйәрһеҙлектән түгел, ә башҡа ҡиммәттәрҙе был тойғонан өҫтөнөрәк ҡуйыуҙарына бәйлелер. Улар аҡса эшләү маҡсатынан да юғарыраҡ, ҡиммәтерәк төшөнсәләр барлығын аңлап етмәйҙәрҙер, моғайын.

**Арыҫлан Фәйзуллин:** Үҙемдән алып әйтәм, илһөйәрлек тойғоһон беҙгә бала саҡтан атай-әсәй, уҡытыусыларыбыҙ тәрбиәләй. Миңә лә атайым үҙенең һалдат формаһын күрһәтеп, үҙе менән булған хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләп, званиеһын аңлатып, күрһәтеп өйрәтте. Ә инде Башҡорт кадет корпусында йыл һайын уҡытыусыларыбыҙ беҙгә ветерандар менән осрашыуҙар ойоштора. Улар ҙа патриотик рухты үҫтереүҙә баһалап бөткөһөҙ роль уйнай.

**Булат Алсынбаев:** Ир-егеттә илһөйәрлек тәрбиәләү өсөн үрнәк алырҙай кемдер булырға тейеш. Беҙҙең Башҡортостанда һәм Рәсәйҙә быңдай батырҙар бик күп һәм улар тураһында йышыраҡ һөйләргә, фильмдар төшөрөргә кәрәк. Мин үҙем һоҡланған шәхес - ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев. Ул һис кенә лә ауырлыҡтарға бирешмәгән, һәр ваҡыт эшен аҙағына тиклем алып барып еткергән. Осоусылар өсөн мөһим сифаттарҙы ла үҙемдә тәрбиәләргә тырышам: вестибуляр аппарат яҡшы эшләргә, сыҙамлы булырға кәрәк. Шуға көн һайын урамда йүгерәм, турникта төрлө күнекмәләр яһайым. Әйткәндәй, ГТО буйынса алтын миҙал эйәһемен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Егеттәр менән әңгәмәләшкәндә: "Ҡыҙҙар хәрби һөнәр үҙләштерергә мөмкинме?" - тигән дә һорау биргәйнек. Улар һөнәр һайлауҙың һәр кемдең үҙ теләгенә бәйле булыуын билдәләне, әммә: "Ҡыҙҙар ҙа алғы һыҙыҡта йөрөһә, беҙ кемде һаҡлап, нимә өсөн һуғышырға тейешбеҙ?" - тип яуап бирҙе. Бына шундай йәшәү мәғәнәһе ниҙә икәнен яҡшы аңлаған, аңлы, аҡыллы, киләсәктә тормош дилбегәһен үҙ ҡулдарына алыр йәштәребеҙ бар, күҙ генә тейә күрмәһен үҙҙәренә! Ә беҙ иһә, Бөйөк Еңеүҙең 78 йыллығын билдәләгәндә, тағы берҙе күк йөҙөбөҙ аяҙ, илдәр имен булыуын һәм үҫеп килгән быуын ир-азаматтарына бер ҡасан да дәһшәтле һуғыш дарыһын еҫкәргә тура килмәһен, тип теләйек!**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

## Байығыуҙың етенсе ысулы: "Аҡса эшләү һәләтлегеңде күтәр"

Байығыу өсөн иң тәүҙә теләк булыуы мөһим. Теләгегеҙ көслө һәм билдәләнгән булһын. Ҡәҙимге дөйөм теләктәр - улар йомшаҡ теләк. Байырға теләйһең икән, аныҡ теләгең булырға тейеш. Бына һин яҡын көндәрҙә биш алтын тәңкәң булыуын теләйһең - был һине нисек тә ошо тәңкәләрҙе табырға мәжбүр итеүсе аныҡ теләк. Был теләк уны тормошҡа ашырыуҙың аныҡ ысулдарын табырға ла ярҙам итәсәк. Теләгең бер кимәлдә генә туҡтап ҡалмай, артабан һин ун алтын тәңкәгә хужа булыу тураһында хыялланаһың - тағы сараһын эҙләйәсәкһең. Бына шулай, тәүҙә ҙур булмаған аныҡ теләкте ғәмәлгә ашырырға өйрәнгәс, артабан уның ҙурыраҡтарына тотонаһың, бер юлы һәләтлектәрең дә үҫә бара. Шулай байлыҡ туплана.

Теләктәр ябай һәм аныҡ булһын. Әгәр улар артыҡ күп булһа, етмәһә, аныҡлығы ла булмаһа, улар тормошҡа ашмаясаҡ.

Кеше үҙенең төп һөнәрендә лә шулай камиллаша, камиллаша барған һайын аҡса эшләү һәләтлеге лә үҫә. Мин әле балсыҡ таҡталарға хәрефтәр уйып яҙыу шөғөлө менән мәшғүл саҡта уҡ үҙемдән уңышлыраҡ эшләүселәрҙе күҙәтә һәм быңың серҙәренә төшөнөргә тырыша торғайным. Улар бар иғтибарын үҙ эшенә, ҡуйған маҡсаттарына йүнәлтә, уны ныҡышмалы ғәмәлгә ашыра икәненә төшөнгәйнем. Мин дә үҙ алдыма маҡсат ҡуйҙым: мине берәү ҙә уҙып китмәһен. Оҫталығым арта барҙы һәм һөҙөмтә бирҙе.

Тәжрибә һәм белем үҫкән һайын беҙ күберәк аҡса эшләй башлаясаҡбыҙ. Күберәк өйрәнергә, күберәк уҡырға, нығыраҡ камиллашырға тырышып ятҡан кеше яҙмыш тарафынан йомарт бүләкләнергә лә тейеш.

Һәр ваҡыт һине яҡшы яҡҡа үҙгәртә һәм камиллаштыра торған эштәр эшләргә тырышығыҙ, сөнки бары тик маҡсатҡа ынтылған кешеләр генә юғары оҫталыҡ серҙәренә өлгәшә ала. Шуға ла мин һеҙҙе туҡтауһыҙ үҫештә булырға саҡырам.

Тормошта кешене ҡиммәтле тәжрибә менән байытыусы хәл-ваҡиғалар булып тора. Үҙен хөрмәт иткән һәр кем, мәҫәлән, ошо ҡағиҙәләрҙе генә булһа ла күҙәтергә тейеш:

- Көсөңдән килгән ҡәҙәре тиҙерәк үҙ бурыстарыңдан ҡотолорға тырыш. Түләү мөмкинлегең булмаһа, бик ныҡ теләгән әйбереңде лә һатып алырға тырышма.
- Үҙ ғаиләң тураһында хәстәрлек күр - ғаиләң ағзалары һинең турала тик яҡшы яҡтан уйларлыҡ һәм һөйләрлек булһын.
- Васыятнамә төҙөп ҡуй - Хоҙай һине үҙ эргәһенә алғанда туплаған мөлкәтең дөрөҫ һәм тигеҙ бүленгән булһын.
- Матди зыян күреүселәрҙе, бәхетһеҙлеккә һәм бәләгә тарыусыларҙы ҡыҙған, уларға ярҙам ит. Үҙеңә ҡәҙерле булған бар кешегә иғтибарлы һәм хәстәрлекле бул.

Шулай итеп, аҡса эшләүҙең һуңғы етенсе ысулы: үҙ һәләтлектәреңде үҫтер. Уҡы һәм белемеңде арттыр. Һөнәреңдең иң камил алымдарына өлгәш.

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**
**(Аҙағы. Башы һанда).**

✓ **_Бынығы да балды ниндәй температураға тиклем йылытыуға бәйле. Умарта эсендә температура 30-35 градус, бал ҡорттары уны ошо йылылыҡта тота. Шуға ла 35 градусҡа тиклем йылытһағыҙ, балдың сифаттары юғалмай._**



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ХЕҘМӘТ ҠАҺАРМАНЛЫҒЫ ҠАЛАЛАРЫ




*40-лап сәнәғәт предприятиеһын һыйындырған* (1)

*И. Сусанин һәйкәле ҡуйылған ҡала* (2)

*Һуғыш йылдарында - Танкоград* (3)

*Радиощуп уйлап табылған ҡала* (4)

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**16-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Төйәк. Варшава. Әкиәт. Китап. Аулаҡ. Австрия. Серәкәй. Ҡарыш. Сепрәк. Тас. Лоа. Юшҡын. Цирк. Ишан. Оҫҡон. Район. Овал. Ом. Алта. Ваба. Ат. Аграрий.

**Вертикаль буйынса:** Сентябрь. Керенский. Капучино. Ваза. Маёвка. Пайсы. Тәртә. Ландыш. Ата. Интернационал. Во. Фа. Квант. Туй. Аяҡ. Юкола. Арыш. Ынйы. Ҡош. Нәнәй.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Май (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (18) дүшәмбе | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 18:43 | 21:00 | 22:30 |
| 9 (19) шишәмбе | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 18:44 | 21:02 | 22:32 |
| 10 (20) шаршамбы | 3:51 | 5:21 | 13:30 | 18:45 | 21:04 | 22:34 |
| 11 (21) кесе йома | 3:49 | 5:19 | 13:30 | 18:46 | 21:06 | 22:36 |
| 12 (22) йома | 3:48 | 5:18 | 13:30 | 18:47 | 21:07 | 22:37 |
| 13 (23) шәмбе | 3:46 | 5:16 | 13:30 | 18:48 | 21:09 | 22:39 |
| 14 (24) йәкшәмбе | 3:44 | 5:14 | 13:30 | 18:48 | 21:11 | 22:41 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ИРЕТЕЛГӘН БАЛ...

Бал файҙалы матдәләргә - антиоксиданттар, витаминдар, пробиотиктар, аминокислоталар, минералдар һәм ферменттарға бай, шуға ла уға тиң продукт юҡ. Ҡатҡан балды иретергә яраймы, уның сифаты үҙгәрмәйәсәкме?

Иреткәс, составы үҙгәрә, әммә бал үҙе ашарға яраҡлы. Бары тик ҡайһы бер файҙалы матдәләре юғала. Бынығы да балды ниндәй температураға тиклем йылытыуға бәйле. Мәҫәлән, умарта эсендә температура 30-35 градус, бал ҡорттары уны ошо йылылыҡта тота. Шуға ла 35 градусҡа тиклем йылытһағыҙ, балдың сифаттары юғалмай.

Артыҡ йылытҡандан балдың микробтарға ҡаршы тороу һәләте кәмей, сөнки инвертаза һәм диастаза кеүек ферменттары юҡҡа сыға, тап улар аш һеңдереүгә булышлыҡ итеп, шәкәрҙең тарҡалыуына ярҙам итә. Шулай уҡ организмға вирустар һәм бактериялар менән көрәшергә ярҙам иткән глюкозооксидаза юғала. Ул организмда водород перекисы барлыҡҡа килтерә, ул, үҙ сиратында, дезинфикациялау сараһы булып тора.

Бал антиоксиданттарға ла бай, артыҡ йылытыу һөҙөмтәһендә улар ҙа юғала. Уларҙың бер төрө - полифенолдар хроник сирҙәр барлыҡҡа килеүгә юл ҡуймай, яман шештән һаҡлай.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 май "Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева), театрлаштырылған тамаша. 18.00 12+

**10 май Премьера! "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 12+

**11 май "Внутри меня цунами"**, истории подростков. 12.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 май "Униженные"** (З. Биишева), драма. 18.00 16+

**9 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. 12+

**10 май "Пеппи ДлинныйЧулок"** (А. Линдгрен), әкиәт. 11.00 0+

**11 май "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+

**"Звезда героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 16.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**9 май "Живи!"** (Р. Сванидзе). 18.00 6+

**12 май Премьера! "Вечно эта 345-я!"** (Ж. Кусаинова). 19.00 12+

**13 май "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 14.00 0+

**14 май "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 14.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**8 май "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия. 12+

**12 май Премьера! "Футлярҙағы кеше. Мөхәббәт тураһында"** (А. Чехов), иллюстрациялы хикәйәләр. 13.00 12+

**13 май "Алтын себеш"** (В. Орлов), музыкаль әкиәт. 13.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**11 май** 32-се ижад миҙгелен ябыу тантанаһында **Премьера! "Бына һиңә, килен...дәр"** (И. Зәйниев), комедия. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**9 май "Ғүмерлек ғазап"** (С. Әбүзәр), драма. 12+

**11 май** *Баймаҡ ҡалаһында* **"Яу ҡупҡас"** (З. Усманова), пластик спектакль. 14.00 12+

**12 май "Ай да, репка!"** ҡурсаҡ спектакле. 10.00 0+

**13 май "Ай да, репка!"** ҡурсаҡ спектакле. 12.00 0+

## БР Милли музейы

**9 май М.М. Шайморатовҡа** бағышланған зал буйлап экскурсия. 12.00 6+

**"Ретро-гаражъ"** шәхси музейы күргәҙмәһе. 12.00 6+

**"Ат уйнатып алдан бара..."** спектакленән өҙөк күрһәтеү. 14.00 12+

**"Еңеү ңызығы"** мәҙәни-ағартыу сараһы. 12.00 12+

**13 май "Бабушкин квадрат"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 12+

**"Таштың хикмәтле донъяһы"** сара. 14.00 6+

ИЖАДХАНА

# СИБАЙҘА - ҮҘ КЕШЕ,

## Салауатта ла - ят түгел

**Шәп әртис үҫеп килә! Салауат башҡорт дәүләт драма театры актеры, Башҡортостандың халыҡ артисы Юнир Ғәйнуллиндың киләсәген уҡытыусыһы бала саҡта тап шулай тип фаразлай. Юрағаны юш килә уның. Малайҙың тәүге тапҡыр сәхнәгә атаһының ҙур быймаларын кейеп, "Шалҡан" әкиәтен ҡуйыуҙан башлаған сәнғәткә оло юлы ошо бәләкәй һуҡмаҡтан башлана.**



Ошо көндәрҙә үҙенең 60 йәшлек матур юбилейын билдәләүсе Юнир Ғәйнуллин хозур тәбиғәтле Ғафури районының Үзбәк ауылында күп балалы татыу ғаиләлә тыуып үҫә. Бала саҡта уның өс хыялы була.

- Тәүҙә космонавт булам тип йөрөнөм. Һуңынан үҙемде киләсәктә рәссам итеп күҙ алдына килтерҙем. 1-се класта уҡығанда уҡытыусыбыҙ Тимербикә апай "Шалҡан" әкиәтен сәхнәләштерҙе, унда атаймдың ҙур быймаларын кейеп, бабай ролен уйнаным. Шунан һуң артист булыу теләге уянды. Бишенсе кластар тирәһендә уҡытыусыбыҙ Альмира апай Мостай Кәримдең "Айгөл иле" спектаклен ҡуйҙы. Унда мин синьор Карло Пиккионы уйнаным. Уҡытыусымдың "Үәт шәп әртис үҫеп килә!" тигән һүҙҙәренән тағы ла ҡанатланып киттем. Ауылдашыбыҙ, композитор, ул ваҡытта мәҙәниәт йорто директоры Рәмил Ғимранов иһә мине ныҡлап сәхнәгә сығарҙы, тип әйтһәм дә хата булмаҫ. Үҙе иждад иткән "Гөлдәр минә сәләм бирә" тигән йыры менән тамашасы алдында сығыш яһаттырҙы һәм "Сәхнә - һинеке", тине. Бик ҙур теләк менән гармунда уйнарға ла өйрәнеп алдым, - ти бала саҡ хәтирәләренә бирелеп Юнир ағай.

Әммә мәктәпте тамамлауға, егет сәнғәт йүнәлеше буйынса уҡырға барырға тәүәккәллек итә алмай һәм Стәрлетамаҡка һөнәрселек училищеһына уҡырға инә, һуңынан заводҡа эшкә урынлаша. Тик күңеле бөтөнләй башҡа нәмә талап итә. Бармағын ҡыҫтырып, ҙур ғына йәрәхәт алғас, эшен ташлап, ауылына ҡайтып китә. Башҡаса гармунда уйнай алмаҫмын, тип ҡурҡа ул. Ауылда мәҙәниәт йорто директоры булып, алты йылға яҡын эшләй. Бер ваҡыт гәзиттә Өфө дәүләт сәнғәт институтына өстәмә ҡабул итеү ойошторолоуы тураһында иғлан күреп ҡала, бөтә ҡыйыулығын йыйып, баш ҡалаға юллана. Имтихандарҙы уңышлы тапшырып, студент булып китә. Уҡыуын тамамлағандан һуң Сибай театрына эшкә ебәрелә һәм 31 йыл ғүмерен тап ошо мәҙәниәт усағына бағышлай.

- Сибай йылы ҡаршы алды. Барғас та "Семәрле тәхет" спектаклендә роль бирҙеләр. Ә "Иректәге тотҡонлоҡ" спектаклендәге Афған һуғышында булып ҡайтҡан, ғәҙелһеҙлек менән көрәшеүсе Хасбулатты иң беренсе етди ролем тип иҫәпләйем. Сибай сәхнәһендә байтаҡ - 70-тән ашыу образ тыуҙырҙым, төрлө пландағы рол-дәрҙе уйнарға тура килде. Һәр сәхнәгә сығыу - тамашасы алдында һынау. Гармунда уйнай торған ролдәрҙе башҡарһам ине, тигән хыялым да тормошҡа ашты. Театр - тормоштоң көҙгөһө, тәрбиә мәктәбе. Тамашасыларҙың бер нисәүһе булһа ла спектаклдән фәһем алып, уйланып ҡайта икән, тимәк, маҡсатыбыҙға ирешкәнбеҙ. Театр - мәңгелек, ул мотлаҡ йәшәргә тейеш, - тигән фекерҙә ул.

- Ә нинә Салауат ҡалаһына күсергә булып киттегеҙ? Яңы коллективҡа өйрәнеү ауыр булманымы? - тигән һорауыма шулай тип яуапланы Юнир Шәкүр улы:

- Салауатҡа күсенеүгә атай нәҙере сәбәпсе булды. Атай-әсәйем, нигеҙебеҙҙе ҡоротма, һыуытма улым, тине. Сибай яҡын ара түгел, йыш ҡайтып булманы. Яндарына ҡайтып тороуҙы шул тиклем көттө улар. Шуға балаларыбыҙҙы башлы-күҙле иткәс, тыуған яҡтарға яҡыныраҡ Салауатҡа юлландыҡ. Йәйләп атай нигеҙен бөтәйтәбеҙ...

Салауат театрын күптәндән беләм, актерҙар менән дә танышмын, фестивалдәрҙә күрешә торғайныҡ. Иҫемдә, театр ошо яңы бинаға күскәндә Сибайҙан делегат булып килдем, музыкаль бүләк итеп бейеү башҡарҙым. Әллә шуға, үҙемде сит мөхиткә эләккәндәй хис итмәнем, киреһенсә, әйтерһең, ғүмер буйы ошонда эшләгәнмен, коллектив ихлас, берҙәм. Быйыл Башҡортостанда ғына түгел, ә бөтә Рәсәйҙә дан тотҡан Салауат театры олпат юбилейын билдәләй. Уның башҡаларҙан айырылып торған һыҙаттары, үҙенең генә йөҙө, үҙ тамашасыһы бар. Бында коллективтың ижади потенциалы көслө, эште йөкмәт башҡаралар, яйлап, ирекенләп йөрөүгә урын юҡ. Һәр минуттан, сәғәттән файҙаланып ҡалырға тырышалар. Хореография, вокал дәрестәре лә бар...

Ысынлап та, был театрға килеүенә ярты йылдан ашыу ғына ваҡыт үтһә лә, Салауат тамашасыһына сағыу образдары менән үҙен танытып та өлгөрҙө Юнир Ғәйнуллин. "Тәүге ролем Рөстәм Хәкимов ҡуйған "Ыңйыҡай менән Юлдыҡай"ҙа Айсыуаҡ роле булды. Беҙ унда Яҡуп ағай Шәрипов менән дублерҙар. Миңзәлә Ҡотошованың "Тыуған ил нимәнән башлана?" әҙәби-музыкаль лекторийында ветеран бабайҙы һәм күптән түгел Лиана Ниғмәтуллинаның "Хазина" премьераһында Аллабирҙе бабайҙы уйнаным", - ти ул ҡәнәғәт йылмайып.

Юнир Ғәйнуллин эшендә генә түгел, шәхси тормошонда ла бәхетле. Уҡыған ваҡытта Баҡалы районы ҡыҙы Фәүнә менән ҡауышып, донъя ҡоралар, ҡыҙҙары Лилиәгә, улдары Ғәзинурға ғүмер бүләк итәләр. "Хәләлем Сибай театрында костюмдар цехы мөдире булып эшләне. Һөнәре буйынса ашнаҡсы булһа ла, яңы эшен яратып башҡарҙы, сәнғәт донъяһын үҙ итте. Икебеҙҙең дә бер өлкәлә эшләү беҙҙе тағы ла ныҡыраҡ берләштерҙе. Ҡыҙыбыҙ бейеүгә әүәҫ, бәләкәй саҡта бейеү түңәрәгенә йөрөнө, улыбыҙ ҙа бейей, фортепианола, гитарала уйнай. Гастролдәр ваҡытында беҙҙең менән бергә йөрөнө. Улыбыҙ хатта "Китмәгеҙ, торнала" спектаклендә малай ролен уйнаны. Тик хеҙмәтебеҙҙең ҡатмарлы икәнен күреп үҫкәнгә, улар сәнғәт юлын һайламаны", - ти Юнир ағай.

Һөйләшеүебеҙҙең аҙағында артист тағы ла театр донъяһындағы сихри мәлдәр бәйәнен дауам итте, киләсәктә лә тамашасыға тоғро хеҙмәт итеп, сәхнәгә тағы ла сағыуыраҡ образдар сығарыу хыялы менән янып йәшәүе тураһындағы хыялын еткерергә лә онотманы. Хыялдар тормошҡа ашһын!

**Динә ҒӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЙҺЫҘ АТЫҢ МАҠТАМА,

## йылһыҙ ҡатын маҡтама

Яман атҡа менгәнсе, йәйәү йөрө талғансы. Яман ҡатын алғынсы, буйҙаҡ йөрө ҡанғансы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хайуандан айырмалы, кеше үҙе яратҡандарҙан ваз кисә һәм ташлап китә ала.

**(Иосиф Бродский).**

Ялған эсендә йәшәгәнсе, яңғыҙың сүллектә йәшәү мең артыҡ.

**(Инга Берристер).**

Үкенеү - бик һуңлап ҡына килә торған аң.

**(Аноним).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Юғары уҡыу йортон тамамлап, абруйлы эшкә урынлашып, юғары вазифалар биләгән элекке студенттар йыйылышып, ҡарт уҡытыусыларының - профессорҙың өйөнә хәл белешергә килә. Һөйләшеү башлыса элекке студенттарҙың зарланыуына ҡорала. Уларҙың береһе - эш урыны менән, икенсеһе - етәксеһе менән, өсөнсөһө эш хаҡы менән риза булмауын белдерә. Профессор уларҙы һүҙһеҙ генә тыңлап ултыра ла, бер мәл һөйләшеүҙе бүлдереп, урынынан ҡалҡына һәм йәштәргә ҡәһүә эсергә тәҡдим итә. Кухнянан ул сәйнүк һәм батмусҡа теҙелгән төрлө-төрлө сынаяҡтар тотоп килеп сыға. Батмустағы сынаяҡтар араһында фарфоры ла, быялаһы ла, пластиктан яһалғаны ла, арзанлыһы ла, ҡиммәтлеһе лә була. Йәштәр кофе ҡойолған сынаяҡтарҙы өләшеп алып бөткәс, профессор былай тип һүҙ башлай: "Иғтибар итегеҙ әле: бына һеҙ батмустағы барлыҡ ҡиммәтле сынаяҡтарҙы алып бөтөрҙөгөҙ. Ә арзанлылары тороп ҡалды. Был ғәҙәти хәл: һәр кем үҙенә яҡшыраҡ киҫәкте эләктерергә теләй. Һеҙҙең бар көйөнөүҙәрегеҙ һәм проблемаларығыҙҙың сығанағы ошонда ла инде. Шуны аңлағыҙ: ҡиммәтле сынаяҡ үҙенән-үҙе генә ҡәһүәне яҡшыраҡ итмәй. Бына әле һеҙҙең теләгәнегеҙ ҙә сынаяҡ түгел, ә ҡәһүә ине. Ләкин һеҙ аңлы рәүештә һәйбәтерәк сынаяҡты һайланығыҙ, шунан кем ниндәй сынаяҡ һайлаған икәненә иғтибарығыҙҙы йүнәлттегеҙ.**

**Ә хәҙер уйлағыҙ инде: тормош - ул ҡәһүә, ә эш, аҡса, карьера - ул сынаяҡ. Ул бары тик йәшәйештә дауам итеүсе инструмент ҡына. Сынаяҡтың ниндәй булыуы беҙҙең йәшәйештең мәғәнәһен һәм асылын билдәләмәй. Ҡайны саҡта сынаяҡҡа ғына иғтибар итеп, беҙ ҡәһүәнең тәме менән ләззәтләнергә лә онотабыҙ...**

**Иң яҡшы нәмәләргә эйә булғандар түгел, шул нәмәләрҙән иң яҡшыһын айыра белгәндәр бәхетле..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәррирәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 3 май 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3267
Заказ - 570